✓ *Әгәр ҙә һин маҡсатыңа табан китеп бараһың һәм һәр юл сатында һиңә ҡаршы өрөп сыҡҡан эттәргә таш бәрергә туҡталаһың икән, ул саҡта һин маҡсатыңа барып етә алмаясаҡһың.*

*(Ф. Достоевский).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30 МАРТ - 5 АПРЕЛЬ (БУРАНАЙ - АЛАҒАРАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№13 (535)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тауға ҡарап...

таш атма



3

Ур-ра, ур-ра!

Тәмәкесегә көн бөтә!



5

Етмеш төрлө уйым...



8-9

"Аҡ пароход"...

ни әйтергә теләне икән?



11

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәҙәниәт, сәнғәт донъяһы менән хәбәрҙар булып йәшәһәгеҙ, был өлкә тураһында әйтер һүҙегеҙ ҙә барҙыр?

***Тимерғәле КИЛМӨХӘМӘТОВ, филология фәндәре докторы, профессор:*** Дөйөм алғанда, баш ҡаланың мәҙәни тормошо ярайһы бай һәм төрлө тип уйлайым. Күңеленә нимә хуш килә, зауығына нимә ярашлы - шулай күңел асырға мөмкин. Әммә яҙ миҙгеле етһә, Өфөнөң төп мәҙәниәт һарайҙарын Ҡазандан килгән йырсылар баҫып ала башлай. Башҡортостан йырсылары, ни эшләптер, әүҙем түгел, тамашасы һайлау мөмкинлегенә эйә булһын өсөн ниндәйҙер пропорция булырға тейеш бит. Икенсенән, күп тамашалар тураһында белмәй ҡалабыҙ, концерт-спектаклдәрҙе рекламалау мәсьәләһе насар ҡуйылған, бәлки, уларға телевидение-радио, гәзиттәр менән әүҙемерәк эшләргә кәрәктер?

Үҙем спектаклдәр ҡарарға яратҡанға, уның тураһында яҙғанға күрә, театрҙарға күберәк йөрөргә тырышам. Башҡорт театрҙарында милли спектаклдәрҙе күбәйтергә ине. Башҡорт сәхнәһендә бер туҡтауһыҙ урыҫ пьесаларын йәки Шекспирҙы тәржемә итеп ҡуйыу милли театрҙы биҙәмәй. Сит ил, урыҫ классикаһын ҡуйыу ҡыйын эш түгел, әлбиттә, улар ҡуйылыу формаһы менән шымарған бит инде. Аңлайым, репертуар йәһәтенән театрҙар еңел хәлдә түгел. Тик тырышһаң, юҡтан бар эшләргә мөмкин икәнен Айрат Абушахмановтың "Руди..." спектакле күрһәтте бит! Балет оҫтаһы тураһында драма әҫәре ҡуйыуы шул тиклем ауыр эш икәнен аңлайбыҙ. Йәш актер Урал Әминевтың шәп уйнауы һөҙөмтәһендә бынамын тигән спектакль килеп сыҡты.

Театрҙарҙың репертуарын тотоп торған Ибраһим Абдуллин, Мостай Кәрим, Әнғәм Атнабаев, Әсғәт Мирзаһитов, Нәжиб Асанбаев кеүек классиктарыбыҙҙан һуң килгән Наил Ғәйетбай, Флорид Бүләков, Рәлиф Кинйәбаев, Салауат Әбүзәровтар быуыны мәҙәк, ҡыҙыҡ яҙып, ваҡ әйберҙәр менән генә була. Ике йыл буйына һанап, һынап йөрөйөм, киләсәккә ҡалырлыҡ бер пьеса булғаны юҡ әле. Элегерәк кәм тигәндә өс-биш йыл һайын шундай бер спектакль сыға ине. Ә. Мирзаһитовтың "Әсәләр көтәләр улдарын" пьесаһын, Ә. Атнабаевтың бар әҫәрҙәрен бөгөн яңынан ҡуйырлыҡ. Б. Бикбай, М. Буранғолов, Ҡ. Даян спектаклдәрен тергеҙергә кәрәк. "Ҡаһым түрә", "Ҡарлуғас"ты сәхнәгә сығар - халыҡ ябырылып йөрөйәсәк. Ошо йәһәттән үҙгәрештәр булыр, тип ышанам һәм республиканың төп театрына Олег Хановтың ҡайтыуын ҙур өмөттәр менән ҡабул иттем. Беренсенән, ул - шәп актер, икенсенән, башҡа театрҙарҙа тәжрибә туплаған белгес.

Башҡорт опера һәм балет театрын бөтөрөп баралар, репертуарҙа бер башҡорт әҫәре юҡ. Күрәһең, йырсыларына йүнле мөнәсәбәт юҡтыр. Был проблемаларҙың нигеҙендә мәҙәниәт менән етәкселек итеүсе ҡаты ҡуллы кеше булмауы сәбәпселер, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ҠУНАҠТАЙ КӨТӨП АЛАБЫҘ...

**"Киске Өфө" бөгөнгө көн талаптарына яуап бирерлек итеп сәйәси, иҡтисади, мәҙәни темаларҙы күтәреүсе, арҙаҡлы шәхестәр, уларҙың тормошо, эше, матур ғаиләләр, халҡыбыҙҙың тарихы менән таныштырыусы, һәр өлкә буйынса күп мәғлүмәт биреүсе иң яҡшы гәзиттәрҙең береһе, тип әйтергә була.**

"Киске Өфө" гәзите төрлө йәштәрҙәге уҡыусылар күңеленә хуш килерлек, бай йөкмәткеле, фәһем биреүсе мәҡәләләр күплеге менән әһәмиәтле. Ул мәғлүмәттәрҙең барыһы ла күңелгә май булып яғыла. Бигерәк тә мәктәптә уҡытылған тел, әҙәбиәт, тарих, дин, тормош һабаҡтары дәрестәрендә ҡулланырлыҡ материалдар күп. Синыф етәкселәренә тәрбиәүи сәғәттәр үткәрер өсөн дә уңайлы, отошло.

Гәзит үҙенең уҡыусыларына мәғлүмәт биреү менән бер рәттән, милли рух та тәрбиәләй. Бөтә донъяға билдәле кешеләрҙең аҡыллы фекерҙәрен, төрлө хәл-ваҡиғаларға бай кеше яҙмышын сағылдырған мәҡәләләрҙе, хикәйәләрҙе уҡып, берсә уйланаһың, берсә тетрәнәһең, фәһем алаһың. Үҙеңдең тормошоңда осраған ваҡиғалар менән сағыштырып, ҡыйынлыҡтарҙы еңергә көс табаһың. Сабыр булырға күнегәһең. Шуға ла "Киске Өфө" гәзитен аҡыллы иман менән һуғарылған, ҡыйыу, үткер гәзит, тип әйтер инем. Уның тураһында һәр ерҙә ошондай фекерҙәр, йылы һүҙҙәр генә ишетергә тура килә.

"Киске Өфө" гәзите уҡыусылары менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй, унда барлыҡ башҡорт донъяһы һыйған. Күңелгә шундай яҡын, ҡәҙерле "Киске Өфө"һөҙ хәҙерге башҡорт матбуғат донъяһын күҙ алдына килтереп тә булмай. Ул бөгөн халҡыбыҙға юл күрһәтеүсе, алға әйҙәүсе, милли рух өҫтәүсе, аң-белем, иман нуры таратыусы, патриотик рухлы, бик аҡыллы, ҡыйыу, һүнмәҫ бер сағыу йондоҙ булып балҡый. Шуға ла ул һәр кешенең күңелен арбай.

*Һай данлыҡлы "Киске Өфө",*
*Һиндә аҡыл, һүнмәҫ рух,*
*Ҡунаҡтай көтөп алабыҙ,*
*Барыбыҙға яҡын дуҫ.*
*Ун йәшең дә тулды бына,*
*Яратҡан "Киске Өфө".*
*Илем йәшәй, телем йәшәй,*
*Һиндә сағыла көсө.*

**Фәнүзә ҒАРИПОВА,**
**пенсиялағы уҡытыусы.**
**Белорет районы Асы ауылы.**



✓ *Тәрәнерәк алғанда, дөрөҫ йәшәү - ул был донъяға ни өсөн тыуғаныңды, үҙеңдең асылың кем икәнде белеү, шул асылыңды табыу, уны иҫбат итеү ул.*



СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ДӨРӨҪ ЙӘШӘҮ НИСЕК БУЛА?

**Был һорауға, мөғайын, төрлө кеше төрлөсә яуап бирә алыр ине. Был яуап, мөғайын, һәр кемдең аң кимәленә бәйләнгәндер. Ә аң кимәле бер төрлө булмай. Әле беҙ Мәләүез ҡалаһында йәшәүсе шағир Тимер Ниәтшиндың яуабын тәҡдим итәбеҙ. Башҡа төрлө яуаптар булһа һәм уны яҙып ебәрһәгеҙ, беҙ бик шат булырбыҙ.**

- Хәҙерге йәштәргә ҡараһаң, философ А.Г. Спиркиндың элегерәк кешеләрҙең, хайуандар һымаҡ, мәлгә генә бойһоноп йәшәгәнлеге тураһында әйткән һүҙҙәре хәтергә төшә. Ул "элек", тип әйтә. Мин - бөгөн, тиер инем. Сөнки мәл талаптарына, нәфсеһенә бойһоноп, ошо йәшәүенең дөрөҫ булыуына ышанған йәштәр бихисап хәҙер.

Ана һөтө менән инмәгән - тана һөтө менән инмәй, тигән аҡыл бар халҡыбыҙҙа. Ғаиләнең дөрөҫ йәшәү ҡанундары менән танышыуҙың тәүге, иң мөһим этабы. Һуңынан балалар баҡсаһы, мәктәп, урам, вуз, хеҙмәт коллективы - һәммәһе лә дөрөҫ йәшәү өлгөһө күрһәтергә тейеш. Дөрөҫ йәшәү тураһындағы аҡыл халҡыбыҙҙа быуындан-быуынға ҡанун, ғөрөф-ғәҙәт рәүешендә күсеп килгән һәм һис тайпылышһыҙ үтәлгән бит. Шуға ла башҡорт көслө, тәртипле, берҙәм, дини халыҡ булған.

Бөгөнгө көндә беҙҙең милләттең дә, башҡа милләттәрҙең дә дөрөҫ йәшәү өлгөһө юҡ, ул онотолған. Шул арҡала аҙмыштар емерелә, кешеләр үҙ-үҙен таба алмай яфалана. Дөрөҫ йәшәү өлгөһө булмау арҡаһында наркоманлыҡ, эскелек, үҙ-үҙеңә ҡул һалыу кеүек кире күренештәр барлыҡҡа килә. Хәҙер, ҡыҙғаныска ҡаршы, ҡупшы кейенеп, тәмле ашап, бына тигән иномаркаларҙа елдереп, артыҡ тир түкмәйенсә йәшәү - күп йәштәр өсөн дөрөҫ йәшәү өлгөһө булып күренә, сөнки зәңгәр экрандарҙан һәм башҡа мәғлүмәт сараларынан шул идеология һеңдерелә бит уларға.

Һорауҙы философик күҙлектән асайыҡ. Ул ике һүҙҙән барлыҡҡа килә: йәшәү һәм дөрөҫлөк. Тыуғас, йәшәү аша һәр кем үтә. Ә бына икенсе һүҙгә, әлбиттә, һәр кемдең үҙ баһаһы. Минең уйымса, Ер йөҙөндә йәшәгән кешеләр араһында үҙенә-үҙе "Мин дөрөҫ йәшәмәйем", тип әйткәндәр күп түгелдер, сөнки дөрөҫ йәшәргә тырышыу - кешенең психикаһында, уның булмышында, күҙәнәк кимәленә һалынған ынтылыш. Тимәк, кешелә үҙен маҡтағанды ишетеү, башҡалар алдында үҙен лайыҡлы итеп тойоу ынтылышы ла көслө.

Кеше биологик, физиологик төшөнсә генә түгел, ул беренсе нәүбәттә, социаль төшөнсә. Ул - милләт, ғаилә, ауыл йәки ҡала, дин вәкиле. Шул күҙлектән сығып, ҡыҫҡаса ғына, әгәр ҙә кеше үҙен уратып алған мөхиттә ҡапма-ҡаршылыҡтар тыуҙырмаһа, беҙ быны дөрөҫ йәшәү, тип атайбыҙ, тип раҫларға мөмкиндер. Был - ябай ғына дөрөҫ йәшәү. Тәрәнерәк алғанда, дөрөҫ йәшәү - ул был донъяға ни өсөн тыуғаныңды, үҙеңдең асылың кем икәнде белеү, шул асылыңды табыу, уны иҫбат итеү ул.

**Иҙел РӘХИМОВ яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Мәҙәниәт, сәнғәт донъяһы менән хәбәрҙар булып йәшәһәгеҙ, был өлкә тураһында әйтер һүҙегеҙ ҙә барҙыр?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәриә ИШЕМҒОЛОВА, журналист:*** Халыҡсан, ихлас булған мәҙәни саралар күңелгә яҡыныраҡ, "Башҡорт йыры", "Байыҡ" бәйгеләрен, сәнғәт әһелдәренең, яҙыусыларҙың ижад кисәләрен шундайҙар рәтенә индерәм. Яңыраҡ "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында биш шағирә ҡатнашлығындағы "Наҙлы йөрәк серен асҡанда" тип аталған шиғриәт кисәһе үҙе бер күңел байрамы булды. Бындай саралар рухыбыҙҙы байыта, тип уйлайым. Спектаклдәргә килгәндә, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында барған "Нәркәс" бик оҡшай, уны бер нисә тапҡыр ҡараным. Тағы ла "Әхмәтзәки Вәлиди" тарихи драмаһы рухты нығыта, ғорурлыҡ тойғолары уята. Уны сит тарафтарҙан килгән дуҫтарым менән махсус ҡараныҡ, халҡыбыҙ тураһында ошо спектакль аша ла әллә күпме нәмәне аңланы улар. Үкенес, тарихи темаларға ҡағылышлы спектаклдәр театр сәхнәләрендә һирәк ҡуйыла. Шулай уҡ "Февраль. Буран...", "Руди..." кеүек арҙаҡлы шәхестәргә арналған спектаклдәрҙе театр репертуарында йышыраҡ күргә килә.

Башҡорт кино сәнғәте тейешле финанслау булмау арҡаһында бер урында тапанып ҡалмаһа ярар ине, тим, уйлы, фекерле кешеләр эшләй ул өлкәлә. Рияз Исхаҡов менән Арыҫлан Бикбай төшөргән "Һөйөнтүҙ" кеүек фильмдар халыҡҡа телевизорҙан йылына ике-өс тапҡыр күрһәтелһен ине. Республика халыҡ ижады үҙәге тарафынан күп саралар үткәрелә, әммә улар телевидениеға төшөрөлмәй, тимәк, халыҡҡа еткерелмәй, күрһәтелмәй ҙә уларҙың эше. Телевидение - сәнғәтебеҙҙе яҡтыртыусы бик көслө ҡорал, ләкин ул милләтебеҙ, үҫеп килеүсе быуын өсөн бик аҙ ҡулланыла. Балалар ҡатнашлығында балалар өсөн әҙерләнгән тапшырыуҙарҙың барыһы ла шәп, ошондай эште алып барған ҡыҙ-егеттәр булғанына ҡыуанам. Салауат Хәмиҙуллин, Искәндәр Сәйетбатталовтарҙың тапшырыуҙарын бар халыҡ ярата. "Хазина" кеүек тапшырыуҙар юҡҡа сыҡҡанына борсолабыҙ.

***Диләрә ҒӘЙНУЛЛИНА, ӨДАТУ магистранты:*** Бөгөн йәштәр өсөн мәҙәни саралар аҙ, тип уйлаусылар бик хаталана. Йыш үтеп торған төрлө тематикалы дискотекаларға барып, башҡортса аралашып, башҡортса йырлап-бейеп ҡайтыуҙы зауыҡлы күңел асыу, тип иҫәпләмәйһең икән, рәхәтләнеп йырсыларҙың концертына йөрөргә була. Шоу-бизнес заманында ижади үҫеш офоғон һәр йырсы үҙе билдәләй, тыныш замандаштарыбыҙ Сәғизулла Байегет, Роберт Юлдашев һәр ижадсыға өлгө булырлыҡ, һәр яҙҙы уларҙың концерттары менән ҡаршы алырға күнегелгән. Унан һуң, йәш кешенең, юҡ, тип, көтөп ултырғаны юҡ, үҙебеҙ ҙә бәйге-ярыштар үткәреп торабыҙ. Йәштәрҙең ижади инициативаһын үҫтереү һәм ярҙам итеүгә "Шаяниум", "Шаян уйын", асыҡ КВН лигаһы кеүек уйындар ҙа булышлыҡ итә, иң мөһиме, беҙ бер-беребеҙ менән аралашабыҙ, берләшәбеҙ, туғанлашабыҙ. Ә һәр районның йәштәр берлектәре сиктәрендә үткән спорт һәм мәҙәни бәйгеләрҙе һанап та бөтәрлөк түгел. Беҙҙең аҙнаның бер көнөндә лә өйҙә күңелһеҙләнеп ултырғаныбыҙ юҡ. Ғөмүмән, бөгөн йәштәр әүҙем һәм берҙәм, тип әйтер инем. Баш ҡалаға уҡырға килгәс, тап ошондай йәштәр рәтенә эләгеп китеүем минең йөрәгемдә рух уятты ла инде. Беҙ бергәләп башҡорт театрҙарына ла йөрөйбөҙ һәм был рухыбыҙҙы тағы ла дәрләтеп ебәрә, тип уйлайым. Комедияларға ҡарағанда, драма жанрын үҙ итәм, сәхнәлә барған ваҡиғаларҙы күреп, илап алһам, таш ҡалала йөрөп, бер аҙ ҡатып киткән күңелем кире үҙ асылына ҡайта төҫлө. "Башҡорт киноһы төнө" кеүек сараларҙы көтөп алам, уны йышыраҡ үткәреү мөмкинлеге табырға ине. "Ҡош юлы" проектының бәләкәй генә кис ултырыуҙары, төрлө түркөмдәр, башҡарыусылар менән осрашыуҙар, музыка тыңлау шулай уҡ рухи көс бирә. Шағирҙар ҡатнашлығында кисәләр мәҙәни тормошто байытып ебәрә, мәҫәлән, Азамат Юлдашбаев менән Рита Фәтҡуллинаның әйтеш рәүешендә алып барылған шиғыр кисәһе шиғри һүҙҙең илаһи көсөн аңларға ярҙам итте.

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Апрелдән 2013 йылдың икенсе яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы рәсми рәүештә старт ала. Почта хеҙмәте хаҡтарҙы бер аҙға арттырған: 50665 индексы "Киске Өфө" гәзитенә хәҙер инде 378 һум 36 тингә яҙылырға мөмкин. Апрелдә баҫмабыҙға яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән тәүге 10 уҡыусыбыҙ Ноғман Мусиндың "Алдар батыр", 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" тигән китаптарына лайыҡ буласаҡ. Кем алыҡ?**



Ауырғазы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә Рәсәй Федерацияһының торлаҡ ҡануниәтендәге яңылыҡтарға арналған Бөтә Рәсәй кәңәшмәһе үтте. Сарала Дәүләт Думаһы, Рәсәй төбәктәре депутаттары, власть органдары вәкилдәре, ғалимдар ҡатнашты. Дәүләт Думаһының Торлаҡ сәйәсәте һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ буйынса комитеты рәйесе Галина Хованская билдәләүенсә, торлаҡҡа капиталь ремонт үткәреү йәһәтенән федераль кимәлдәге закондарға индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, төп ауырлыҡ РФ субъекттарының закон сығарыу власына төшәсәк һәм закондың ниндәй булыуы, граждандар өсөн ниндәй шарттар булдырылыуы урындағы депутаттарҙан тораҫаҡ.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә РФ мәғариф һәм фән министры Дмитрий Ливанов менән осрашты, тип хәбәр иттеләр төбәк башлығының матбуғат хеҙмәтенән. Осрашыуҙа Башҡорт дәүләт университетын, Өфө дәүләт авиация техник университетын, Өфө дәүләт нефть техник университетын һәм Башҡортостандың башҡа юғары уҡыу йорттарын үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде. Рөстәм Хәмитов Башҡорт дәүләт университеты нигеҙендә милли тикшеренеү университеты булдырырға тәҡдим итте. Дмитрий Ливанов был тәҡдимдең министрлыҡта тикшереләсәге хаҡында әйтте.

✓Башҡортостан Президенты Мәскәүҙә РФ тәбиғәт ресурстары һәм экология министры Дмитрий Донской менән осрашты. Осрашыуҙа Өфөлә Дуҫлыҡ монументынан алып тимер юл күперенә тиклем Ағиҙел йылғаһы ярын нығытыу, "Башҡортостан Уралы" биосфера резерватын үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде. Билдәләнеүенсә, Ағиҙел йылғаһы ярын нығытыу буйынса проект әҙер, дәүләт экспертизаһынан ыңғай һөҙөмтә алынған. Йылға ярын нығытып торған әлеге бетон ҡорамалдар 50 йыл элек төҙөлгән, уларҙың 50 проценттан ашыуы яңыртыуға мохтаж.

✓2013 йыл башынан алып Башҡортостанда законһыҙ рәүештә 23 мышы, 35 ҡабан һәм 3 ҡоралай атып алынған. Был ваҡыт эсендә республикала һунарсылыҡ ҡағиҙәләрен боҙоу буйынса йөмғеһе 132 осраҡ асыҡланған. Хоҡуҡ һаҡлау органдарына һунарсылыҡ ҡағиҙәләрен боҙоуҙа ғәйепләнгән 41 һунарсыға ҡарата материалдар йүнәлтелгән. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостанда 37500-ҙән ашыу кеше федераль өлгөләге һунарсы билеттары алған. Улар республика халҡының 0,8-0,9 процентын тәшкил итә. Һунарсыларҙың күпселеге ҙур ҡалаларҙа йәшәй.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ТАУҒА ҠАРАП...

## таш атма

**"Тауға ҡарап, тау була алмаҫһың" тип тә әйтәләр. "Тауға ҡарап таш атма" әйтемен иһә, ябай ғына итеп, "тауға ҡарап таш атма, атһаң, башыңа үҙеңдең атҡан ташың төшөр", тип тә аңларға була. Ысынлап та, бейек тау янында ҡулына таш тотоп, уны тау башына ташларға йыйынып торған кешене күҙ алдына килтерһәң, был күренеш көлкө лә тойола, шул уҡ ваҡытта әйтемдең мәғәнәһе үтә ябай һәм аңлайышлы кеүек. Әгәр ҙә мәғәнәһе шулай ғына булһа, ниңә кәрәк булды һуң әле бындай фәлсәфә, тип тә уйларлыҡ. Шуға күрә тәрәнгәрәк ҡараш ташлап ҡарайыҡ.**



Япондарҙың бер кенәзлегендә шундай закон ҡабул ителгән: алтмышы тулған һәр кешене балалары тауға алып барып ҡалдырып китергә бурыслы. "Беҙгә үсеп килгән балаларҙың һәм йәштәрҙең өлөшөнә ингән артыҡ ауыҙҙар, әрәмтамаҡтар кәрәкмәй", тигән был хаҡта закон ҡабул итеүсе кенәз. Закон буйынса, балалары аталарын һуңғы юлға арҡаһына һалып йөкмәп алып барырға, быныһ менән уларға һуңғы тапҡыр хөрмәт күрһәтергә тейеш икән.

Шулай итеп, бер ваҡыт ағалы-ҡустылы ике егет алтмышы тулған аталарын алмашлап күтәрә-күтәрә, тауға менеп баралар икән. Бына бер ваҡыт атаһын йөкмәп барған ағай кеше, арҡаһына ымлап, ҡустыһынан:

-Беҙҙең атай унда мыштырҙап нимә эшләй? - тип һорай икән.

-Нимә эшләһен инде, нисек итеп көн үткәрергә белмәйенсә, ағастарҙың ботағын һындырып алып, юлға ташлап бара, - тип яуап биргән уға ҡустыһы.

-Атай, ниңә улай итәһең, беҙ ҡайтып киткәс, ергә ташланған ботаҡтар буйынса кире өйгә ҡайтмаҡсыһыңмы? - тигән арҡаһындағы атаһын һелкетеп-һелкетеп алып өлкән улы. - Кенәз кире ҡайтҡан атайҙарҙы таш менән туҡмап үлтерергә ҡуша. Шуға күрә юҡ менән булма, атай, был законды беҙ үйлап сығарманыҡ, ҡарышма...

Улдарына бер ни тип тә яуап бирмәгән атай кеше. Ул һаман да ҡулына эләккән ботаҡтарҙы һындырып алып, юлға ташлауын белгән. Улар тау үренә эңер төшөүгә генә барып еткән. Егеттәр аталарын ҙур ағастың төбөнә ултыртҡан да, тан атҡанын да көтөп тормайынса, шундуҡ ҡайтырға ҡарар иткән. Улар атаһы менән бәхилләшкән, уға барлыҡ ризыҡтарын, эсәр һыуҙарын ҡалдырған. Үҙҙәре һөҙәк урау юлдан ҡайтыуҙы яйһыҙ күреп, тоҫмал менән туп-тура ауылдарына табан ынтылған. Уларҙың алдында һуҡмаҡ осраған, шунан бер аҙ бара биргәс, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, кире үргә табан киткәндәр. Һуҡмаҡтан ситкә тайпылыуҙары булған, шырлыҡ араһында тамам аҙашып, үҙҙәрен бүреләр ҡамап алған. Шул саҡ ҡараңғы төн килгән. Һупылдаған өкөләрҙең йыҙлаған күҙҙәрен күреп, малайҙар илай-илай аталарына ҡысҡырып, уны ярҙамға саҡырған. Ишетмәгән шул уларҙы аталары, бик алыҫ урында ҡалған. Егеттәр был саҡта инде тауҙың бөтөнләй икенсе яғына барып сыҡҡан булған. Уларҙы бүреләр өҙгөләүҙәнән усаҡ яғыуҙары ғына ҡотҡарған.

Төнө буйы ҡысҡыра-ҡысҡыра тамаҡтары ҡарлығып, сарсап, бүреләрҙән ҡоттары осоп, дер ҡалтырауҙан йөрәктәре алынған һәм асыҡҡан егеттәр таңғы ҡояш нурҙары күренеү менән үк ҡотолоу сараһы эҙләп, баштары һуҡҡан яҡҡа киткән. Көнө буйы тау битләүендәге урман араһын ҡыҙырған улар. Инде тамам арып, талсығып, ҡолар хәлгә еткән саҡтарында аталары юлға ташлаған ботаҡтарға килеп сыҡҡан ағалы-ҡустылы был икәү. Йүгереп барып еткән улар аталары янына һәм кәҙерле кешенең аяғына йығылып, ғәфү үтенгән. Аталары һаман да, улдары ағас төбөнә нисек ултыртып киткән булһа, шул килеш ҡымшанмай ҙа ултыра икән. Улар ҡалдырған ризыҡҡа ла, һыуға ла бөтөнләй ҡағылмаған атай кеше.

Артабан нимә булған, тиһегеҙме? Улар өсәүләшеп ултырып, тамаҡ ялғаған, һыуһынын ҡандырған һәм улдары, атаһының ҡаршылашыуына ҡарамайынса, уны арҡаһына йөкмәп, ҡайтыр юлға сыҡҡан. Уларға ауылға тиҙ генә ҡайтып етер юлды ергә ташланған ағас ботаҡтары күрһәтеп барған. Егеттәр ошо урында ғына аталарының уларҙы нисек итеп яратҡанын аңлаған. Улдарым кире ауылға ҡайтҡан саҡта юлда аҙашмаһын, тип ташлаған булған ул юлға ағас ботаҡтарын.

Ауылда инде, билдәле, кенәз сығарған закон буйынса атай кешене таш менән үлтергәнсе туҡмау әмәле көткән. Әммә егеттәр аталарын һаҡларға ҡарар иткән һәм йорттарына төндә кеше күрмәгәндә генә ҡайтып төшөп, иҙәндәренең аҫтына ҙур баҙ ҡаҙып, аталарын шунда йәшереп йәшәтә башлаған. Көндөҙҙәрен улар алмашлап аталарына ашарға төшөргән, төндәрен атай кеше йортҡа күтәрелеп йөкләр булған. Ошо рәүешле бер йыл үтеп тә киткән.

Бер ваҡыт туҙға яҙмаған закондар сығарыусы, фармандар биреүсе кенәз үҙенең биләмәһендә йәшәүселәргә көлдән арҡан ишергә бойорған. Кем дә кем был ғәмәлде башҡара, уны ҙур бүләк көтә икән. Егеттәр ҙә үҙ бәхетен һынап ҡарамаҡсы булған һәм аталарынан кәңәш һораған.

-Һаламды тоҙло һыуға тығып, ҡамсы итеп үрегеҙ. Һалам кипкәс, ҡамсыға ут төртөгөҙ, - тип кәңәш биргән уларға аталары. Егеттәр шулай иткән дә. Уларҙың уңғанлығына һәм тапҡырлығына һоҡланған кенәз:

-Улайһа, һеҙгә тағы ла бер эш ҡушам. Әгәр ҙә уныһын да эшләй алһағыҙ, теләһә ниндәй һорауығыҙҙы үтәргә ризамын, - тигән туҙға яҙмаған закондар һәм фармандар батшаһы булған кенәз.

Был юлы ул егеттәрҙең ҡулына ҙур диңгеҙ ҡабырсағы тоттороп, уның әллә нисә бөгәләүле бәләкәй тишектәре аша еп үткәрергә ҡушҡан. Нишләһен егеттәр, тағы ла аталары янына килгәндәр. Кенәздең йомошон аңлаҡас, аталары уларға ҡырмыҫҡа, еп һәм дөгө ярмаһы килтерергә ҡушҡан. Артабан ул ҡырмыҫҡаға еп бәйләгән дә, уны ҡабырсаҡ эсенә төшөрөп, ҡабырсаҡ осондағы ярыҡ янына дөгө һалып ҡуйған. Билдәле, ҡырмыҫҡа тәмлекәстең еҫенә тамшанып, ҡабырсаҡтың эсендәге әллә нисәмә лабиринтты үтеп, еҫкә килеп тә сыҡҡан.

Ошонан һуң егеттәр теге ваҡиғаны кенәзгә тулыһынса һөйләп бирергә мәжбүр булған һәм аталарына ҡарата законды ҡулланмауҙы үтенгән. Кенәз уларҙың һорауын үтәү генә түгел, ғөмүмән, алтмышы тулғандарҙы тауға алып барып ҡалдырыу тураһындағы законды ғәмәлдән сығырып, егеттәргә ҙур бүләктәр биреп, уларҙың дәрәжәһен дә күтәреү хаҡында фарман сығарған...

"Тауға ҡарап таш атма" әйтеме менән был ваҡиғаның ниндәй уртаҡлығы бар тиһегеҙме? Бар икән дә шул. Тәбиғәттең олпат өлөшө тау тип атаһа, кешеләр араһында ундай олпатлыҡҡа өлкән кешеләр, тормош аҡылын үҙенә туплаған аҡһаҡалдар эйә. Кенәздең шундай аҡһаҡалдарҙы тауға алып барып үлергә ҡалдырыу хаҡындағы законы уларға таш менән атыуға тиң булған. Һәр хәлдә, был хәлде кенәз һәм уның улдары шулай баһалаған. Олоно оло итә белеү, ихтирам итеү, хатта уларҙың ниндәйҙер ғәйептәре булған сүрәттә лә уларҙы аяу хаҡында ла бара бында һүҙ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Мәскәүҙә РФ Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Ольга Голодец менән осрашты. Осрашыуҙа етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыу, уҡытыусыларҙың эш хаҡын арттырыу, мәғариф системаһы мәсьәләләре тикшерелде. Республикала баланы уллыҡҡа алған ғаиләләр өсөн әсәлек капиталы күләмендә (408 мең һум) бер тапҡыр бирелә торған пособие түләнә, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән баланы уллыҡҡа алған осраҡта пособие күләме 508 мең һумға тиклем арта, тип хәбәр итте Рөстәм Хәмитов. Бынан тыш, Башҡортостанда былтыр 600-ҙән ашыу етем бала фатир алды. Осрашыуҙа аҙ комплектлы ауыл мәктәптәрен һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе лә күтәрелде.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Алексей Кудриндың РФ субъекттарында власть системаһын реформалаштырыу буйынса инициативаһына комментарий бирҙе. "Минеңсә, Рәсәй Федерацияһы субъекттарында властың парламент тарафынан һайланыуы федераль кимәлдәге ҡануниәткә ҡаршы килә, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Төбәк башлығын һайлап ҡуйырға кәрәк, быныһ өсөн тейешле ҡануниәт булдырылған". Уның һүҙҙәренсә, республикала үткәрелгән социологик һорау алыу мәғлүмәттәре буйынса, халыҡтың 65-67 проценты бындай һайлау яҡлы.

✓Башҡортостанда уртаса айлыҡ эш хаҡы ғинуар-февраль айҙарында 20137,5 һум тәшкил итте. БР Иҡтисади үҫеш министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2012 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда, номиналь иҫәпләнгән эш хаҡы 12,7 процентҡа артҡан. Ысынбарлыҡта, йәғни ҡулланыу хаҡтары индексын иҫәпкә алғанда, хеҙмәт хаҡы 5,2 процентҡа артҡан. Халыҡтың йән башына уртаса килеме 15691,5 һум тәшкил иткән. Үткән йылдың тәүге ике айы күрһәткестәре менән сағыштырғанда, был 10,1 процентҡа күберәк.

✓Өфөлә яҙғы мода аҙналығы 14-19 апрелдә үтә. Сараны ойоштороусылар аҙналыҡтың сараларға бай һәм ҡыҙыҡлы буласағын билдәләй. "Йыл модельеры" ижади конкурсында Рәсәйҙең төрлө ҡаланынан модельерҙар үҙҙәренең уникаль коллекцияларын тәҡдим итәсәк. "Солнечный круг" йәш дизайнерҙар бәйгеһендә Балалар ижады йорттарында, үсмерҙәр клубтарында, балалар мода театрҙарында, кейем дизайны йүнәлешендә эшләгән студияларҙа һәм мәктәптәрҙә шөғөлләнеүселәр ҡатнашасаҡ.

**"Башинформ"дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЯҠТАШЫБЫҘ...

## Үҙәк банк етәксеһе

**Владимир Путин Үҙәк банк етәксеһе вазифаһына РФ Иҡтисади үҫеш министрлығының экс-министры, әлеге мәлдә иҡтисади мәсьәләләр буйынса Президент ярҙамсыһы булған Эльвира Нәбиуллинаны тәҡдим итте. Әгәр ҙә Дәүләт Думаһы ыңғай ҡарар ҡабул итһә, ул был вазифаға раҫланған беренсе гүзәл зат буласаҡ.**

Билдәле булыуынса, Эльвира Нәбиуллина Өфөлә тыуып үҫә. Мәктәптә - алтын, Мәскәү дәүләт университетын ҡыҙыл дипломға тамамлай һәм 34 йәшендә Рәсәй иҡтисады министры урынбаҫары була. Министрлыҡта һәм унан алдараҡ Рәсәй сәнәғәт һәм эшҡыуарҙар берлегендә либераль реформалар өҫтөндә эшләй. Евгений Примаков Премьер-министр булған саҡта Министрҙар кабинетынан 1998 йылда шәхси бизнеска - Промторгбанк идараһы рәйесе урынбаҫары булып китә. Э. Нәбиуллинаның тағы бер эш урыны - "Стратегик тикшеренеүҙәр үҙәге", (ЦРС) асылда иһә, премьер-министр Путиндың һайлау алды иҡтисади штабы була. 2000 йылда Путиндың енеүенән һуң был үҙәктең етәксеһе Герман Греф - иҡтисади үҫеш министры, ә Э. Нәбиуллина беренсе урынбаҫар итеп тәғәйенләнә. 2007 йылда Герман Греф вазифаһынан киткәндән һуң, Э. Нәбиуллина министр булып ҡала.

Етди эшлекле костюмдар, баҫалҡы тауыш - уның портреты бына шундай. Ул ваҡытлы матбуғат саралары журналистарына ла асылып бармай - уның интервьюлары күп түгел һәм уларҙа артыҡ хис-тойғолар күҙәтелмәй. Шәхси тормошо тураһында халыҡ уның тормош иптәшенең шулай уҡ күренекле кеше - Юғары иҡтисад мәктәбе университеты ректоры Ярослав Кузьминов булыуы арҡаһында ғына таныш. Был ғаиләнең килеме тураһындағы декларация юғары квадрат метрҙар йәки автопарк менән дә аптыратмай.

Әгәр Эльвира Нәбиуллина был вазифаға тәғәйенләнһә, унан нимә көтергә һуң? Был кандидатураны хуплаусылар ҙа, уға ҡаршылар ҙа бер фекерҙә: артыҡ үҙгәрештәр булмаясаҡ. Мәҫәлән, Рәсәйҙең төбәк банктары ассоциацияһы президенты, финанс баҙары буйынса Дәүләт Думаһы Комитеты рәйесе урынбаҫары Анатолий Аксаков белдереүенсә, был, бер яҡтан, яҡшы, сөнки аҡса киҫкен хәрәкәтте яратмай. "Әммә икенсе яҡтан, Нәбиуллина быға тиклем иҡтисади үҫеш өсөн яуап биргәнлектән, Үҙәк банктың реаль секторҙы кредитлауҙы арзанайтырға ярҙам итеүе бар. Мәҫәлән, Үҙәк банк ресурстарына 5 түгел, ә 30 банк юл аласаҡ, тик бер үк ваҡытта быны ҡаты күҙәтеү аҫтына алырға кәрәк буласаҡ".

Әммә Нәбиуллинаның ҡыйыу аҙымдар яһау мөмкинлегенә лә өмөттәр бар. 2010 йылда тап уның министрлығы бюджет елкәһендә байып ултырған дәүләт корпорацияларын "ҡыҫырыҡлап" сығарҙы. Министрлыҡ шулай уҡ тупланған резервтарҙы инфраструктур проекттарға йүнәлтеү буйынса сығыш яһай. Бәлки, Нәбиуллина Рәсәйҙең аҡса запасын сит илдә туплауҙы туҡтата алыр?

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ҺАҠЛАНҒАНДЫ...

## Хоҙай һаҡлар!



**Халыҡ мәҡәле "Һыуҙан ҡала, уттан ҡалмай", тиһә лә, һәр тинең өсөн хәләл тиреңде түгеп, бөртөкләп йыйған донъяң бер килеп һыу аҫтында ҡалһа - унда инде фажиғә сәбәпсеһе утмы, һыумы - айырма юҡ кеүек. Бары тик ялбарыулы ҡараштарыңды төпһөҙ күккә төбәп, "Эй, Хоҙайым, ни өсөн?", тип ҡабатларға тура килмәһен ине.**

Ә бының сәбәптәре төрлө булыуы мөмкин. Тотош республика буйынса фекер йөрөткәндә, һыу сығанаҡтары буйында түбәнлектәрҙә урынлашҡан ауылдар йылдың нисек килеүенә ҡарап (ҡышын ҡар норманан артыҡ яуғанмы, яҙ ҡапыл киләме, һыу ергә һеңеп өлгөрәме, юҡмы һ.б.), бәхетһеҙлек урыны булыуы ихтимал. Баш ҡалала төпләнергә теләп, шундай түбән урындарҙан ер алып йорт һалған шәхси милекселәр ҙә бындай хәүефтән азат түгел. Мәҫәлән, ҡала округы хакимиәтенең граждандарҙы яҡлау идаралығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ташҡын ваҡытында 2880 кеше йәшәгән 744 торлаҡ йорттоң һыу баҫыу зонаһында ҡалыуы, ә инде был осор Ағиҙелдә боҙ китеү мәлənә, йәғни 5-11 апрелгә, Ҡариҙел йылғаһында 4-10 апрелгә, Димдә 8-14 апрелгә тура килеүе мөмкин.

Һыуҙың нығ күтәрелеү райондары булып Затон, Дим, Нижегородка биҫтәләре тора. Ғәҙәттә, кешеләр бәлә килгәндә лә урлашыу осраҡтарынан ҡурҡып, йорттарын ташлап китергә теләмәй. Шуға күрә улар менән инструктаж үткәрелә, сирлеләрҙең һәм ауырлы ҡатындарҙың исемлеге төҙөлә, иҫәбе алына, иҫкәрмәләр таратыла, уҡыусылар араһында яҙғы боҙҙа уйнау йәки ҡыҙыҡ өсөн генә йөрөп ҡараусың хәүефле булыуын аңлатыу эштәре алып барыла. "Тиҙ ярҙам күрһәтеү маҡсатында 53 ҡотҡарыусы, 19 йөҙөү саралары, күсмә һыу һурҙырыу станцияһы, юғары һөҙөмтәле ике помпаһы булған эҙләү-ҡотҡарыу отряды даими хәрби әҙерлектә тора", - тип белдерә "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" белгестәре. Ә инде тотош ҡала биләмәһендә 2997 кешенән һәм 928 берәмек техниканан торған команда булдырылған. Һыу ҡапыл күтәрелеп, ярҙарҙы ашмаһын өсөн 8000 кубометр ҡом әҙерләнгән. 21 мартта иһә Рәсәй ғәҙәттән тыш хәлдәр хеҙмәтенең Башҡортостан территориаль органы көстәренең әҙерлеге тикшерелде.

Ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов билдәләүенсә, һыу йылғалар ташыу сәбәпле генә баҫмай, ҡарҙың күпләп иреүе лә быға сәбәп булып тора. Шуға күрә сити-менеджер яуаплы хеҙмәттәргә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ҡала юлдарындағы, урамдарҙағы һыу ағыу коллекторҙарын таҙартып, һыуҙың аҡмай йыйылып тороуын бөтөрөү эшен йөкмәтте.

**Әйткәндәй, һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, тип юҡҡа әйтмәгәндәр. Был уңайҙан халыҡ араһында шундай көләмәс тә йөрөй: имеш, ҡапыл һыу баҫа башлағас, бер кеше өй ҡыйығына менеп, Аллаһы Тәғәләнән ярҙам һорап ялбара икән. Шул саҡ күршеләре, һыу күтәрелә, беҙҙең кәмәлә бер урын бар, әйҙә, беҙҙең менән, тип саҡырған. Был кеше: "Юҡ, Аллаһы Тәғәлә миңә ярҙам итә ул", - тип, күккә ҡарап ялбарыуын дауам иткән. Бына эргәһенә моторлы кәмәлә үтеп барыусылар туҡтап: "Беҙҙә бер кеше ултырырлыҡ урын бар, әйҙә!" - тигән. Бәндә тағы ла Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтенә өмөт итеп, баш тартҡан. Һыу ҡыйыҡҡа тиклем күтәрелгән. Был кеше мейес торбаһының башына менеп ултырып, тағы ла нығыраҡ Хоҙайға ялбара башлаған. Шул саҡ ҡайҙандыр вертолет килеп сығып, быға баҫҡыс ырғытҡандар, ләкин ул Аллаһы Тәғәләнең ҡотҡарыуына өмөтләнеп, был ярҙамдан да баш тартҡан. Һыу инде торбаға ла еткән... Бәндә асырғанып: "Эй, Хоҙайым! Ғүмер буйы һиңә ышанып, ғүмер буйы һиңә табынып йәшәнем! Ниңә мине ярҙамыңдан мәхрүм итәһең?" - тип ҡысҡырған. Ә күк киңлегенән: "Эй, бәндәм, мин һиңә өс тапҡыр ярҙам ебәрҙем, ниңә ул ярҙамды үҙең ҡабул итмәнең?" - тигән яуап килгән. Артыҡ мин-минлеккә, тәкәбберлеккә бирелеп, булған ярҙамдан баш тартмайыҡ, ярҙамды ла лайыҡлы ҡабул итә беләйек, тиеүем. Ни тиһәң дә, донъя малы бер көнлөк, ғүмерҙәр ҡәҙерлерәк.**

Шәрифә САЛАУАТОВА
әҙерләнә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠОТҠАРЫУ СӘҒӘТЕ

**Башҡортостан Хөкүмәтендә балиғ булмағандар эштәре һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса комиссия ултырышы үтте. Сараны БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова алып барҙы.**

Ултырышта "Башҡортостан Республикаһында балалар хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында"ғы БР законын тормошҡа ашырыу мәсьәләләре тикшерелде. Ул "балаларҙың комендант сәғәте тураһында закон" булараҡ билдәле һәм ата-әсәләрҙең балаларҙың төнгө сәғәттәрҙә ҡарауһыҙ булыуы өсөн яуаплылығын күҙ уңында тота.

Яҡынса йомғаҡтар үҫмерҙәр араһында енәйәтселек кимәленең кәмеүен күрһәтә. Шулай итеп, 2012 йылда республикала үҫмерҙәр араһында енәйәтселек кимәле 16,3 процентҡа кәмегән, шул иҫәптән балиғ булмағандар менән башҡарылған енәйәттәр һаны 12,8 процентҡа кәмегән.

- Властар был акция менән балаларҙы бәләнән һаҡлап ҡалырға теләһә лә, "комендант сәғәте" һүҙбәйләнеше ата-әсәләр тарафынан насар ҡабул ителә, - тине Лилиә Ғүмәрова. - Йомғиҡтә бының комендант сәғәте түгел, ә балаларҙы ҡотҡарыу сәғәте булыуын һендерергә кәрәк.

Ултырышта ҡатнашыусылар был мәсьәләне Бөтә Рәсәй бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдәр съезында күтәрергә тәҡдим итте. Сара 2013 йылдың 16-18 апрелендә Өфөлә үтәсәк.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда Рәсәй Социаль страховкалау фондының БР буйынса төбәк бүлексәһе бала табыу сертификаттары программаһы буйынса түләүҙәр биреүгә 144,4 миллион һум аҡса бүлгән. Программала йөмғеһе 94 медицина ойошмаһы ҡатнаша. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, 2013 йылдың ике айы эсендә республикала 8744 сабый, шул иҫәптән 4430 малай һәм 4314 ҡыҙ тыуған. Ғаиләлә икенсе булып тыуған балалар яңы тыуған сабыйҙарҙың 38,4 процентын тәшкил итә. Ә өсөнсө һәм унан һуңғы бала тапҡан ғаиләләр һаны, үткән йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда, 5,6 процентҡа артҡан.

✓2012 йылда Рәсәйҙә ҡымыҙ етештереү күләмдәре 18,2 процентҡа артҡан. Илдәге ҡымыҙҙың күпселек өлөшө, йәғни 63 проценты, Башҡортостанда етештерелә. Ростов һәм Тверь өлкәләрендә - 6,1-6,9 %, Ярославль өлкәһендә 5,5 % тура килә. Рәсәйҙәге ҡымыҙҙың яҡынса үндан бер өлөшө Алтай крайында, Саха, Мари Эл республикаларында етештерелә. 2012 йылда Рәсәйҙә ҡымыҙ етештереү өлкәһендә Волга буйы федераль округы абсолют лидер булған. Бында продукция күләменең 74 проценты етештерелгән.

✓"Медиапрофи" премияһы - яңы форматтағы ҙур төбәк проекты. Ул баҫма матбуғат, телевидение, электрон киң мәғлүмәт саралары журналистарының профессиональ кимәлен күтәреүгә, журналистика эшмәкәрлегенең үҫешенә, яңы таланттарҙы асыҡлауға булышлыҡ итеү маҡсатында булдырылды. Яңы премия йыл һайын тапшырыласаҡ һәм билдәле бер тема буйынса үтәсәк. 2013 йылда ул "Хеҙмәт кешеһе" темаһына арнала. Конкурс тураһында Положение Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлығы, Журналистар союзы, Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы сайттарында урынлаштырыласаҡ.

✓Башҡортостанда 2012 йыл йомғаҡтары буйынса торлаҡты сафҡа индереү динамикаһы насар түгел. 2,3 миллион квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған, үҫеш 10 процент тәшкил иткән. Бындай темптар уртаса Рәсәй кимәленән ике тапҡырға юғарыраҡ - республика был күрһәткес буйынса Рәсәй субъекттары араһында ете алдынғы төбәк иҫәбенә инде һәм Волга буйы федераль округында икенсе урында тора. Шул уҡ ваҡытта республика бер кешегә иҫәптә халыҡтың торлаҡ менән тәьмин ителеше буйынса әлегә тик алтмышынсы урындарҙа килә.

*ЯҢЫ ЗАКОН*

**Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары өсөнсө уҡыуҙа "Тәмәке тартыу эҙемтәләренән халыҡтың һаулығын һаҡлау тураһында"ғы закон проектын ҡабул итте. Яңы законды Совет Федерацияһы ла яҡланы. Ил Президенты ҡултамғаһы менән уны ғәмәлгә индерҙе.**

# УР-РА, УР-РА!

## Тәмәкесегә көн бөтә!



Ағымдағы йылдың 1 июненән йәмәғәт урындарында тартыу тулыһынса тыйыла, йәғни тәмәке көйрәтергә яратыусылар өсөн дәүләт учреждениелары, ресторан, юғары уҡыу йорттары, дауахана, поезд, мәктәп, автобус һәм метро яны туҡталыштарына "ишектәр" ябыла. Шулай уҡ пляж һәм балалар майҙансыҡтарында ла тартыу тыйыласаҡ. Тәртип боҙоусыларға 1 мең һум күләмдә штраф һалынасаҡ. Ә 2014 йылдың 1 ғинуарынан иһә ҡунаҡхана, дөйөм туҡланыу урындарында һәм электричка көтөү перрондарында ла тәмәке тартыусылар административ яуаплылыҡҡа тарттырыласаҡ. Шулай уҡ киләһе йылдың 1 июненән санаторий, алыҫ юлға йөрөүсе поезд, самолет, ҡала һәм ҡала яны транспорттарында, аэропорт, метро һәм вокзалға инеү урынынан 15 метр яҡыныраҡ арауыҡта ла тәмәке тартыу законды боҙоу, тип иҫәпләнәсәк.

Быға тиклем урам буйындағы тәмәке һатыуҙан байтаҡ аҡса алған киосктар ҙа килемдәренән ҡолаҡ ҡағасаҡ, сөнки тәмәке һатыу майҙаны 50 квадрат метрҙан (ауылдарҙа - 25 квадрат метр) да кәм булмаған магазиндарҙа ғына рөхсәт ителәсәк. Шулай уҡ магазин кәштәләренә тәмәке ҡапсыҡтарын һалып ҡуйыу ҙа тыйыласаҡ. Уның урынына һатып алыусыға тәмәке хаҡы яҙылған прейскурант менән генә хушһынырға тура киләсәк. Был аҙым, чиновниктар фекеренсә, тәмәкене рекламалауҙы бөтөрөүҙең бер юлы. Ғөмүмән, яңы закон тәмәкегә ҡағылышлы һәр рекламаны тыя. Улай ғына ла түгел, бынан һуң фильмдан тәмәке тартыусы герой тураһындағы кадрҙы алып ташларға, йырҙан тәмәке хаҡындағы юлдарҙы һыҙып ташларға ла мөмкин буласаҡ.

Яңы закон проектына ҡараштар төрлөсә. Уны яҡлаусылар менән бер рәттән, ҡырҡа ҡаршы сығыусылар ҙа бихисап. Тәүгеләре тәмәкеселәрҙе үҙҙәренең генә түгел, ә эргәләрендәге кешеләрҙең дә һаулығына төкөрөп ҡараусы булараҡ ҡабул итә һәм бындай закон күптән булырға тейеш ине, тигән ҡараштa. Икенселәр иһә, күп осраҡта үҙҙәре тәмәке борҡотоусылар, яңы законды кеше хоҡуғын боҙоусы документ итеп ҡарай. Шулай ҙа тәмәке көйрәтеүселәр араһында ла законды яҡлаусылар етерлек. Нисек кенә булмаһын, механизм көйләп ебәрелде һәм ул файҙалы һөҙөмтәләргә килтерер, тип ышанғы килә. Мәҫәлән, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ошо юл менән 2020 йылға тәмәке тартыусы рәсәйлеләрҙең һанын 25 процентҡа тиклем кәметергә иҫәп тота. Ә бөгөнгө көндә Рәсәй тәмәке тартыу буйынса донъяла беренсе урында тора. Ил халҡының яҡынса 39 проценты, йәғни 44 миллион тирәһе, тәмәке көйрәтә. Улар араһында балаларҙың, ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм йәштәрҙең күп булыуы айырыуса хәүефле. Бынан бер-нисә йыл элек кенә тәмәке тартыусы балаларҙы күреү башҡа һыймаҫлыҡ хәл булып тойолһа, бөгөн иһә башланғыс кластарҙа уҡыусыларҙың да тәмәке көйрәтеүе ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Элегерәк йәшенеп тартҡан балалар һәм үҫмерҙәр бөгөн бер кемдән оялмай һәм ҡурҡмай көйрәтә. Шулай ҙа тәмәкегә ҡаршы көслө көрәш тулҡынынан мәктәп уҡыусылары ла ситтә ҡалмаясаҡ. Оҙаҡламай 10 йәше тулған һәр баланың үпкәһенән сыҡҡан һауала углекислый газдың күләмен тикшереү өсөн тестар үткәрелә башлаясаҡ. Ләкин әлегә теория рәүешендә генә йәшәгән был проекттың практик йәһәттән ниндәй булыры билдәһеҙ. Тест хаҡында алдан иҫкәртәсәктәрме әллә табиптар көтөлмәгәндә киләсәкме? Һәр бала тесты мәжбүри үтәсәкме, әллә бының өсөн ата-әсәнең рөхсәте кәрәк буласаҡмы? Ғөмүмән, әлегә яуаптарҙан бигерәк һорауҙар күберәк. Ләкин был юҫыҡта күптән ниндәйҙер аныҡ аҙымдар эшләнергә тейешлеген иҫәпкә алғанда, был проект хуплауға лайыҡ, сөнки ниндәйҙер ауырыу йәки насар ғәҙәт менән көрәшеүгә ҡарағанда, уны киҫәтеү яҡшыраҡ.

Бөгөнгө көндөң шулай уҡ аптырашта ла ҡалдырған, йәнде лә әсеткән бер күренеше - гүзәл заттарҙың тәмәке тартыуы. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙҙың был насар ғәҙәте башҡа һыймаҫлыҡ хәл булһа, әсә булырға әҙерләнгән һылыуҙарыбыҙҙың тәмәке көйрәтеүе иһә бөтөнләй ҡырағайлыҡҡа тиң. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарҙың 45 проценты тәмәке тарта. Шуға күрә йыл һайын тәмәке тартыуҙан барлыҡҡа килгән ауырыуҙарҙан үлгән 400 мең рәсәйлегә бындай әсәнән тыуған балаларҙы ла өҫтәү хата булмаҫ, сөнки ундай әсәнән һау бала тыуыуы икеле. Әлбиттә, был ғәҙәттән мәжбүри рәүештә баш тарттырып булмай, шуға күрә, бәлки, буласаҡ әсәләр менән психологик йәһәттән ҙур эш алып барыу ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшергә ярҙам итер ине.

Ә күпме кешенең тәмәке тартыуын ташлап та, яңынан башлауына барыбыҙ ҙа шаһит булғаны бар. Яңы закон яман ғәҙәтенән ҡотолорға теләп тә, теләгенә өлгәшә алмағандарға бушлай дәүләт медицина ярҙамы күрһәтергә вәғәҙә итә. Улай ғына ла түгел, яңы законға ярашлы, тәмәке тартыусы кеше медицина учреждениеһына башҡа төрлө һорау менән мөрәжәғәт итһә, махсус иҫәпкә ҡуйылмайынса һәм тәмәкенең зарары хаҡында лекция тыңламайынса, дауахананан сығып китергә тейеш түгел. Ләкин үҙ белдеге менән тәмәке тартыусылар исемлегенә инергә теләүселәр һәм һәр ваҡыт етмәгән ваҡытын сарыф итеп лекция тыңлап ултырыусылар булырмы икән, тигән һорау тыуа. Шулай ҙа ун кешенең, исмаһам, икәүһе табиптар һүҙенә ҡолаҡ һалып, тартыуын ташлаһа ла, был үҙе үк ҙур еңеү буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, чиновниктар ҙа, йәмғиәт тә яңы закон ҡабул итеп кенә, тиҙ арала тәмәке тигән яуыздан ҡотолоп булмаясағын яҡшы аңлай. Йылдар буйы бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ үҫешкән һәм сәскә атҡан был өлкәлә хәлдәрҙе үҙгәртеү өсөн дәүләт кимәлендә яңы закон ҡабул итеү һәм төрлө штрафтар билдәләү генә аҙ, тәү сиратта, был проблемаға ҡарата халыҡтың ҡарашы үҙгәреүе мөһим.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әҙерләне.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## АУЫРЫУ СӘБӘП ТҮГЕЛ

**Ирем заводта цех начальнигы. Шәкәр ауырыуы киҫкенләшеп киткәс, өс ай өйҙә дауаланырға тура килде. Эшкә сыҡҡайны, урынына кеше алғандар, ә иремә, йыш сирләүе сәбәпле, эшенән китергә кәңәш биргәндәр. Үҙ хоҡуҡтарын яҡлау өсөн уға ни эшләргә?**

- Тәүҙән үк шуны әйтәбеҙ: ирегеҙ тыныс ҡына үҙ эшен дауам итә ала. Больничныйҙа йыш һәм оҙаҡ булғаны өсөн эш биреүсе уны эштән сығара алмай, сөнки эш биреүсе башланғысы менән хеҙмәт килешеүен өҙөүгә сәбәпсе нигеҙләмәләр исемлегендә оҙайлы ауырыу иҫкә алынмай. Уны шулай уҡ түбәнерәк вазифаға күсереү ихтималлығы ла ҡаралмаған. Был ирегеҙгә икенсе эшкә күсеү кәрәклеге тураһында медицина һығымтаһы бирелгән осраҡта ғына мөмкин. Ул саҡта ла эш биреүсе ауырыуҙың һаулығына зыян килмәҫлек эш урыны тәҡдим итергә бурыслы. РФ Хеҙмәт кодексының 73-сө статьяһына ярашлы, медицина һығымтаһы нигеҙендә эшсегә 4 айға йәки бөтөнләйгә икенсе эшкә күсергә тәҡдим ителеп тә, эш биреүсе ҡарамағында уға яраҡлы вазифа булмаһа йәки ирегеҙ башҡа урынға күсергә теләмәһә, уны эштән сығарыу законлы тип ҡараласаҡ. Медицина һығымтаһы ирегеҙҙе тулыһынса эшкә яраҡһыҙ тип танығанда осраҡта ла был уны сәләмәтлеге буйынса эштән бушатыуға нигеҙ була ала. Ләкин һеҙҙең осраҡта был хаҡта һүҙ бармай, аңлашылыуынса. РФ Хеҙмәт кодексының 73-сө статьяһы 2-се бүлегенә ярашлы, урынына башҡа кеше алыныуы ирегеҙҙе икенсе вазифаға күсереүгә йәки бөтөнләй эштән сығарыуға нигеҙ була алмай. Эйе, ваҡытлыса эштә булмаған (ауырыу, отпуск йә командировка сәбәпле) эшсе урынына башҡа кеше алыныуы тәбиғи, ләкин уның менән был осраҡта ваҡытлыса хеҙмәт килешеүе төҙөлә һәм элек эшләгән кеше үҙ урынына сыҡҡас, ваҡытлыса эшләгән эшсе менән хеҙмәт килешеүе өҙөлә.

## ФАТИРҺЫҘ ТОРОП ҠАЛМА

**Күп йылдар инде ҡатыным менән гражданлыҡ никахында торабыҙ, икебеҙ ҙә пенсионер.Тәүге иренән ҡатынымдың ике балаһы бар. Фатир һатып алғайныҡ, минең ризалыҡ менән ул уны үҙ исеменә яҙҙыртты. Мин унда теркәлмәгәнмен, йәшәйем генә. Ҡатыным менән берәй хәл була ҡалһа, фатирға минең дә хоҡуғым танылырмы?**

- Никахығыҙ теркәлмәгән икән, бер ниһеҙ тороп ҡалыуығыҙ бар. Ғәмәлдә был әле үк шулай бит: фатирҙа һеҙҙең өлөш юҡ, тимәк, уның ниндәйҙер өлөшөн тәүҙән үк үҙегеҙҙең дә исемгә яҙҙырырға кәрәк булған. Шуға күрә һеҙгә кисекмәҫтән законлы никахҡа инергә, никах килешеүе төҙөргә һәм унда фатирҙағы үҙ өлөшөгөҙҙө теркәтеп, шунда уҡ үҙегеҙгә яҙҙырып ҡуйырға кәңәш итәбеҙ. Ә инде ҡатынығыҙ бындай килешеү төҙөргә риза түгел икән, уны мәжбүр итеү мөмкин түгел. Уның менән берәй хәл булып киткән осраҡта ла, әгәр һеҙҙең исемгә васыят яҙмаһа, шулай уҡ бер ниһеҙ ҡаласаҡһығыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, васыят - бик ышанысլы документ тип әйтеп булмай, сөнки милек хужаһы уны үҙе теләгән ваҡытта юҡҡа сығара йә үҙгәртә ала. Ҡатынығыҙ менән никахығыҙҙы рәсмиләштерегеҙ - был һеҙгә ниндәй ҙә булһа гарантия бирәсәк. Был һеҙгә мираҫ буйынса, ҡатынығыҙ икенсе кеше исеменә васыят яҙған хәлдә лә, үҙ өлөшөгөҙҙө йәки мотлаҡ өлөшөгөҙҙө ( пенсионер булараҡ, быға хоҡуғығыҙ бар) алырға мөмкинлек бирәсәк. РФ Гражданлыҡ кодексының 1148, 1149-сы статьяларын ҡарағыҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

### Йод ярҙам итер



Яҙғыһын тамаҡ ауыртыуына, тауыш бөтөүенә, ангинаны көсәйтеүгә килтереүсе микробтар күбәйә, сирҙе көсәйтә. Шуға күрә йод быуынан ингаляция яһау мөһим.

### Теш һыҙлағанда

❖ 1 ҡалаҡ кипкән шалфейҙы 200 мл һыуҙа 10 минут ҡайнатырға һәм һыҙлау баҫылғансы ауыҙҙы сайҡарға.

❖ Һыҙлаған тешкә, йылытып, прополис ҡуйырға

❖ Аҡ шыршы (пихта) майына мансылған мамыҡты һыҙлаған тешкә ҡуйһаң да һыҙлау үтә.

### Крахмал да кәрәк

Төрлө тире ауырыуҙарында ҡысыныуҙы баҫыу өсөн крахмал ваннаһы шифалы, нервыны ла баҫа.

### Йоҡлай алмағанда

Төрлө сәбәптәр менән ҡайһы саҡта бөтөнләй йоҡо ҡаса. Шул мәлдә төнгөлөккә 100-200 мл кәбеҫтә һуты эсеү файҙалы. Тоҙло кәбеҫтә һуты ла ярап ҡала.

### Варикоз

Тамырҙар киңәйһә, 25 грамм ваҡланған аҡ тал ҡайырыһын 1 литр һыуҙа 30 минут ҡайнатып һөҙөргә, ҡайырыһын һығып ташларға һәм ванна итеп файҙаланырға.

### Картуф

Картуфтың да дауаһы сикһеҙ. Яман шеш булғанда 1 ҡалаҡ кипкән картуф сәскәһен 0,5 литр ҡайнар һыуға һалырға, термосҡа ҡойорға, 3 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 мәртәбә 100 мг эсергә. Картуфты геморрой менән яфаланыусылар ҙа уңышлы ҡуллана.

### Ҡыяр һуты

❖ Тын юлдары ауыртҡанда, йүткергәндә ҡыяр һутына бал ҡушып, көнөнә 2-3 мәртәбә 2-3 ҡалаҡ эсергә кәрәк.

❖ Ҡыяр һуты оҙаҡ йүткергәндә, үпкә сирендә бик файҙалы, йөрәк эшмәкәрлеген дә яҡшырта, шешенеүҙе лә бөтөрә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Утыҙынсы дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре", "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Ватанды һөйөү. Бөтөн йүнәлештәр өсөн дә был - иң һуңғы дәрес һәм темаһы бер үк. Алдағы дәрестәрҙә илһөйәрлек темаһын үткән саҡта беҙ башҡорт халҡының үҙ илен иҫ китмәле оло һөйөү менән яратыуы һәм һәр саҡ уны һаҡлау өсөн йән аямай яуға ташланыуы тураһында һөйләшкәйнек.

Илебеҙҙә йәшәгән бөтөн халыҡтарҙа ла ил тойғоһо бик көслө. Әммә Оло Ватаныбыҙға булған оло һөйөү тойғоһо иң бәләкәйҙән генә - һин йәшәгән йорттан башлана. Илдә ҡоролоштар ҙа, дәүләт-хөкүмәт етәкселәре лә үҙгәреп тора. Тик бер нәмә мәңгелек - ул һин йәшәгән ил, һинең тыуған төйәгең, атай-олатайҙар һаҡлап-ҡурсалап алып ҡала килгән тыуған ер. Тыуған ер тойғоһо бик көслө тойғо. Шуның өсөн дә ата-бабаларыбыҙ уны йән аямай ҡурсаларға тырышҡан.

Әлегә беҙ илгә һөйөүҙе үҙебеҙҙең тырышып уҡыу, күркәм тәртибебеҙ аша сағылдырырға тейешбеҙ. Беҙҙең һәр беребеҙ ил бәҫен күтәрә ала. Мәҫәлән, Ирек Зариповты алайыҡ. Ул, ысынлап та, заманыбыҙ батыры. Һуңғы дәрестә йомғаҡ яһап, уҡыусылар үҙҙәре ил данын күтәреүселәр тураһында белгәндәрен һөйләһен. Был предмет буйынса ниндәй мәғлүмәттәр алғандар - шул хаҡта ла һәр береһенән ҡыҫҡа яуаптар алырға мөмкин.

Шулай итеп, былтырғы-быйылғы уҡыу йылында илебеҙ мәктәптәрендә "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" тигән дөйөм атама аҫтында алты төрлө йүнәлештә яңы предмет уҡытыла башланы. Йүнәлештәр төрлө һәм ул мәктәптәрҙә атай-әсәйҙәр ҡатнашлығында һайлап алынды: "Православие мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Йәһүд мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Буддизм мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Дини мәҙәниәттәр нигеҙҙәре", "Донъяуи этика нигеҙҙәре". Башҡорт мәктәптәре өс йүнәлеште һайланы: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Дини мәҙәниәттәр" һәм "Донъяуи этика нигеҙҙәре". Рус телендә нәшер ителгән дәреслектәр Рәсәй Мәғариф академияһы һәм Рәсәй Фәндәр академияһы тарафынан ыңғай баһа алды. Башҡорт мәктәптәре һайлаған өс йүнәлештәге дәреслектәр ошо әсбаптарҙан тәржемә ителде. Уҡытыусыларҙың һорауы буйынса "Киске Өфө" гәзитендә ошо өс йүнәлеш буйынса ла бер аҙ методик кәңәштәр биреп барҙыҡ.

Был предмет уҡыусыла ла, атай-әсәйҙәрҙә лә бихисап һорауҙар тыуҙырасаҡ. Шуның өсөн дә уҡыусы донъяла ниндәй төп диндәр барлығын, уларҙың уртаҡ яғы һәм айырмаһының ниҙә икәнлеген белергә тейеш. Ни өсөн, мәҫәлән, будда диненә ышаныусылар доға уҡығанда, башҡа диндарҙар кеүек, Аллаға мөрәжәғәт итмәй? Ни өсөн мәсеткә баш кейемен мотлаҡ кейеп инергә кәрәк, ә сиркәүҙә, киреһенсә, баш кейеме менән инеү тыйыла? Ни өсөн ислам дине Алла һүрәтен төшөрөүҙе, илаһҡа табыныуҙы тыя, ә православиела, буддизмда илаһҡа табыналар? Нимә ул мәсет, сиркәү, синагога, кирха? Ошо һорауҙарға яуап табыу өсөн "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"н йәки "Донъяуи этика нигеҙҙәре"н һайлаған мәктәп уҡыусыларының, ата-әсәйҙәрҙең үҙҙәренә лә ошо китаптар менән танышыу мотлаҡ, әлбиттә. Шуға ла беҙ ошо предметты өйрәнгән балаларҙы яңғыҙ ҡалдырмаҫҡа, һәр өлкән кеше, шулай уҡ уҡытыусы ла, ата-әсә лә уларҙың һорауҙарына яуап бирергә әҙерләнергә бурыслыбыҙ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА,**
**Рәсәй Федерацияһы дөйөм белем биреү мәктәптәренең почетлы хеҙмәткәре.**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Эшсе-Крәҫтиән Хөкүмәте менән Башҡортостан Хөкүмәте араһында автономиялы Совет Башҡортостаны төҙөү тураһында Килешеүгә 94 йыл тулды. Был күп милләтле Рәсәй дәүләте өсөн мөһим ваҡиға булып тора, сөнки унда йәшәгән милләттәрҙең береһе үҙенә автономия алып, ысын мәғәнәһендә федерализмға нигеҙ һала. Әммә ысынбарлыҡ раҫлауынса, был датаға Үҙәк власть һаманғаса күҙ йомоп, уны хәтерҙән һыҙып ташлатырға тырыша. Ләкин халыҡ, милләт йәшәй, уның ата-бабалары тәүгеләрҙән булып ҡулына ҡорал тотоп, үҙ аллылығын ҡан менән яулап алған икән, ҡан хәтере тарихты оноторға юл ҡуймай. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты уҙғарған түңәрәк ҡор ҙа быға асыҡ миҫал булып торҙо һәм ундағы һөйләшеү тарих биттәрен байҡау менән бер рәттән, алда торған юбилей даталарын (95, 100 йыллыҡтар) ҡаршылау буйынса тәүге ултырыш рәүешен алды. Әйҙәгеҙ, ундағы төп фекерҙәргә ҡолаҡ һалайыҡ:**

# ҠАН МЕНӘН ЯУЛАНҒАНДЫ...

## аң менән яҡлайыҡ!

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы:** Был Килешеү 1917 йылда иғлан ителгән Башҡортостан автономияһын Үҙәк властың таныуы ул. Һәм ул легитим автономия булып тора, сөнки Бөтөн Башҡорт съезында, башҡорт милләтенең абруйлы вәкилдәре дәррәү тауыш биреү нигеҙендә төҙөлә. Уның Рәсәйҙең башҡа автономияларынан айырмаһы ла шунда: Башревком, йәғни хәрбиҙәр ҡабул иткән декрет нигеҙендә төҙөлгән автономияларҙы теләгән ваҡытта таркатып ебәрергә мөмкин, ә Башҡорт автономияһы Килешеү нигеҙендә төҙөлгән һәм уны таркатыу мөмкин түгел. Бөгөн милли республикаларҙы бөтөрөү тураһында һүҙ алып барған сәйәсмәндәр ошо айырманы аңламай.

Тағы шуны өҫтәп әйтергә кәрәк: бөгөн Килешеү федерализмға нигеҙ һалған, тибеҙ икән, шундай уҡ ышаныс менән уның илдең беренсе Төп Законы ролен үтәүен дә оноторға ярамай. Иң ҡыҙығы: Килешеүҙә башҡорттарҙың айырым армияһы һаҡлана, дәүләттең айырым статусы билдәлә. Сөнки Башҡортостан Хөкүмәте февралдә эсерҙар уларҙың үҙаллылығын танымаған өсөн большевиктар яғына сыға. Большевиктар ҙа башҡорттарҙың үҙаллылығын танымаһа, үҙ армияһы булған милләттең ҡабат эсерҙар яғына сығыу йәки икенсе уйламаған аҙым яһау хәүефе тыуа. Башҡорт милли корпусы ойошоу ҙа ҡыҫҡа ваҡытта - ай ярым эсендә тормошҡа ашырыла. Башҡорт ир-егеттәре, башҡорт халҡы үҙ автономияһын, үҙ аллылығын яҡлау, һаҡлау өсөн үҙ теләге менән туплана. Шуға күрә лә беҙ башҡа милләттәрҙән һәм халыҡтарҙан айырмалы, Башҡортостандың үҙаллылығын ҡулыбыҙға ҡорал тотоп, ҡан менән яулап алғанбыҙ, тип әйтергә тулы хаҡлыбыҙ.

**Ришат САБИТОВ, БР Президенты Хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы етәксеһе урынбаҫары:** Минеңсә, был темаға арналған түңәрәк ҡор йыл һайын үткәрелергә һәм уның мәртәбәһе йылдан-йыл үҫергә тейеш. Ата-бабаларыбыҙ ҡабул иткән был тарихи документтың әһәмиәте шунда: бер яҡтан, ул халыҡтарҙың үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыуға йүнәлдерелә, икенсе яҡтан, Рәсәй дәүләтселегенең иҡтисади, хәрби көсөн тулыландырыуҙа ла мөһим роль уйнаған. Ошо ике йүнәлеште алып барыу ул ваҡыт өсөн бик кәрәк булған. Бөгөн дә, 94 йыл үтһә лә, Үҙәк власть менән субъекттар араһындағы килешеүҙәр, вәкәләттәр, хоҡуҡтарҙы бергә һөйләшеп бүлешеүҙәр үҙенең көнүҙәклеген юғалтмаған.

БР Президенты Рөстәм Хәмитов менән Башҡортостандың автономияһын иғлан итеүҙең 100 йыллығын Рәсәй кимәлендә байрам итеү буйынса Рәсәй Президентына хат яҙырға һөйләшеп килештек. Уның проекты әҙер. Был бөйөк дата буйынса Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең Указыны, башҡа формалағы документтарны булырға тейеш, тигән фекерҙәбеҙ. Һәм Рәсәй масштабында үтерлек саралар планы эшләнергә тейеш. Шуға мин Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына ошо планды төҙөүҙә әүҙем ҡатнашыуын, идеялар, тәҡдимдәр индереүен һорап мөрәжәғәт итәм.

**Нурмөхәмәт НИҒМӘТУЛЛИН, Башҡортостан Диниә назараты мөфтөйө:** Халҡыбыҙ тарих дауамында күпме боролоштар үткән, әммә шунда ла үҙенең юлынан тайпылмаған, үҙенең ерен, телен, динен юғалтмаған. Тарихтың бик күп биттәре әле асылып бөтмәгән, ҡайһылары саҡ асыла. Әммә 1917 йылда иғлан ителгән Башҡортостан автономияһы мөһим мәсьәләләрҙең береһе итеп дин мәсьәләһен дә күтәреүе билдәле. Шуға 2017 йылда беҙҙең Башҡортостан Диниә назаратына ла 100 йыл тула. Башҡортостандың ҡыҫҡа энциклопедияһында беренсе мөфтөй Мансур Халиҡов булған, тигән мәғлүмәт бар, әлеге һөйләшеүҙә асыҡланыуынса, баҡтиһәң, беренсе мөфтөй Шаһишәриф Мәтинов булған икән. Был яңылышлыҡты ла төҙәтергә кәрәк. Баймаҡ районы ла был эшкә ҡушылып, яҡташтарының исемен мәңгеләштереү буйынса эш башҡарһын ине. Әгәр 2017 йылда беҙҙең автономияның да 100 йыллығы булһа, алда ҙур эштәр көтә. Ваҡыт бик аҙ. Әле мин бер документ алып килдем, автономия иғлан иткәндә ике сәркәтип булған, шуларҙың береһе - Шәйехзада Бабич. Уның ҡулы менән яҙылған документ - бик ҙур тарихи ҡомартҡы. Әле документтарҙың күпселеге уҡылмаған, тикшерелмәгән, тимәк, эшләйһе, асыҡлайһы нәмәләр бихисап.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# УЙҺЫУ ЕРҘӘ ТҮТӘМЕ?

**Башҡорт халыҡ йырҙары юғары поэтик кимәлдә ижад ителгән, шуға күрә унда бер генә һүҙҙең дә артыҡ йәки яңылыш булыуы мөмкин түгел. Мәҫәлән, барыбыҙға ла таныш "Зөлхизә" йырының һүҙҙәрен алайыҡ.**

**Ялан да ғына ерҙән болан килә,**
**Уйһыу ҙа ғына ерҙән дә ай түтә, тип, Зөлхизә...**

Элегерәк йәш башҡарыусыларҙың ҡайһы берҙәре "түтә" һүҙен аңламай, уның урынына "үтәм" тип йырлай торғайны. Башҡорт теле һүҙлектәрендә "түтә" һүҙе ике мәғәнәне белдерә:

1. Тура мәғәнәлә - түтә юл.
2. Төйҙә - мылтыҡ түтәһе, балта түтәһе.

Һуңғыһы диалекттарҙа, нигеҙҙә Арғаяш, Туҡсоран һөйләштәрендә осрай. Күренеүенсә, "Зөлхизә" йырында ул тәүге мәғәнәне белдерә. Йәғни, йырҙың һүҙҙәрен былай аңларға кәрәк:

Ялан да ғына ерҙән болан килә,
Уйһыу ҙа ғына ерҙән дә ай тура тип, Зөлхизә...

Бынын шулай булыуы бәхәсһеҙ һымаҡ. Әммә Бөрө районы Осиновка ауылында йәшәүсе элекке биология уҡытыусыһы /хәҙер пенсияла/ Ғарифулла ағай Аллағужин бынын менән риза түгел икән. Шуны ла әйтеү кәрәктер - Ғарифулла Сәлих улы Күгәрсен районы Өмөтбай ауылында тыуып үҫкән, һуғыш йылдарында бала ғына көйө ҡуянға йөрөп, ун йәшендә һунарсы тигән даны сыҡҡан, ун өс йәшендә бүре атып алған һәм әле лә һунарсы шөғөлөн ташламаған абруйлы һәм ихтирамлы зат.

-Атайым да һунарсы ине, - ти Ғарифулла ағай.- "Түтә" һүҙен мин иң беренсе унан ишеттем. Башта аңламай инем, һунынан ғына төшөндөм - атайым уны төйҙә һымаҡ ҡаты, төпһәле үләнле, үтеп сыҡҡыһыҙ түңәкле урынға ҡарата әйткән булған икән. Ә хәҙер йырҙың йөкмәткеһенә киләйек. Прозаға әйләндереп әйткәндә, былай килеп сыға: "Ялан ерҙән болан китеп бара, уйһыу ерҙән бармай, сөнки унда - түтә (тура)". Ә мин һунарсы булараҡ, шуны беләм: болан, бер нигә ҡарамай (янып торһон, шартлап торһон), бары тик тура юлдан йөрөй. Нишләп ул тура юлдан ҡурҡырға тейеш? Тимәк, был осраҡта "түтә" һүҙе тап ана шул үтеп сыҡҡыһыҙ түңәкле ер, тигәнде белдерә.

Ғарифулла ағай менән килешергә лә булыр ине. Ләкин уның үҙенең үк һүҙҙәренән йәнә бер һорау тыуа. "Болан, янып торһон, шартлап торһон, бер нигә ҡарамай, бары тик алға, тураға бара", ти ул. Шулай булғас, ниңә уны түтә, йәғни, үтеп сыҡҡыһыҙ түңәкле урын ҡурҡытырға тейеш? Бәлки, хикмәт икенселәлер? Бәлки, был осраҡта "ялан" менән "уйһыу" һүҙҙәре синоним рәүешендә ҡулланылғандыр? Прозаға әйләндереп әйткәндә, былай: "Тура булғанлыҡтан, уйһыу ерҙән дә болан китеп бара". Тик уйһыу ялан буламы икән? Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ШӘРЕҠТӘН - ҒӘРЕБКӘСӘ,

## йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы



Мәндей Төпәевтың әллә атаһы, әллә ҡарттаһы Өстамаҡта, Уй, Өйәл, Һамар ҡушылған ерҙә ҡаҙаҡтарҙы башҡорт еренә керетмәҫ өсөн бер төркөм яугирҙәр менән һаҡта тороуы билдәле. Уға арнап, "Бутас полковник" тигән йыр ижад ителгән. Ул шәхес - Бутас Төпәев. Бутас Төпәй улы илһөйәр, халҡын ҡурсалаусы, әйҙәүсе. Ул ғәскәри сиреү төҙөп, ҡалмаҡтарҙы ла, һуңғараҡ ҡаҙаҡтарҙы ла башҡорт еренә керетмәй, тубыл ярында торған Өстамаҡ тигән нығытмала торған. Халыҡ хәтерендә ул илен, халҡын ҡурсалаусы ҙур шәхес булып ҡалған. Рәсәй, Урта Урал аша Себергә үткәс, Бутастың йоғонтоло кеше икәнен белеп, уға полковник дәрәжәһе лә бирә. Әммә ул урыҫ әрмеһендә хеҙмәт итмәй.

Ә нәҫел-нәсбәте унан 70-80 йылға һуңғараҡ йәшәгән. Мәндей Төпәев Пугачев восстаниеһында батшаға тоғро старшиналар иҫәбендә булып, Ырымбур, Өфө, Бөрө яҡтарында Пугачевҡа, Салауатҡа ҡаршы һуғыша. Халыҡ Ям тауы тип атаған тау итәгендә Мәндейҙең яу ыҙмаһы, ат ҡуралары була. Күрәһең, Мәндей Төпәев урыҫ дәүләтенең башҡа илгә яһаған һуғыштарында батырлыҡ та күрһәткәндер. Урыҫ теле һәм мәҙәниәте менән дә ярайһы уҡ таныш булғандыр. Сөнки уны Исәт провинцияһы Ырымбур губернаһы Үрге Йайыҡ, Златоуст, Мейәс, Сыбаркүл юлдарына Ям комиссары итеп юҡҡа тәғәйенләнмәгәндер. Шул биләгән дәрәжәһе менән Мәндей Төпәев хөкүмәт хеҙмәткәре булып киткән. Бына ҡайҙа ята икән бер хәҡиҡәт. "Бутас полковник" йырын йырлағанда Ҡорама ауылы кешеһе, 1904 йылғы Ғаттар бабайым Ҡорамшин шулай йырлай ине:

*Сапҡан ғына һайын уҙа икән*
*Палкауник та Бутас күк аты.*
*Сапҡан ғына һайын уҙмаҫ ине,*
*Ул бит данлы Төпәй ҡеүәте.*

Был төп йыр сиреү башы полковник Бутас Төпәевҡа арнап сығарылған. Ә Һөләймән ауылынан 1905 йылғы Яруллина- Латипова Хәнифә әбей башҡаса һүҙләне:

*Сапҡан ғына һайын да уҙыр ине*
*Сиреү башы Бутас та күк аты, эй,*
*Сиреү башы Бутас та күк аты.*
*Сапҡан ғына һайын да уҙмаҫ ине,*
*Ул бит данлы Төпәй ҡеүәте.*

Бында Хәнифә әбей менән Ғаттар бабай Өстамаҡ һыҙмаһына алайы менән һаҡта торған сиреү башы Бутас Төпәев тураһында йырлаһа, Кәлимулла бабай Ям комиссары тураһында йырлай. Әммә тарих комиссар Бутасты белмәй. Күрәһең, йылдар үтеү менән халыҡ Бутастың ейәне Мәндейгә лә төбәп, шул йырҙы йырлаған.

Мәндей Төпәев тураһында тарихта мәғлүмәттәр ярайһы уҡ. Әммә фекерҙән йыраҡ китмәҫ өсөн Ям юлы комиссары Мәндей Төпәев тураһында бер генә мәғлүмәт-документ күсермәһе килтерәм.

"Указ Оренбургского губернатора И.А.Рейнсдорпа к старшинам и сотникам ближних к Яику башкирских волостей Уфимского уезда о наряде команды из 500 башкир для действия против отрядов Е.И.Пугачева, появившихся под Яицким и Илецким городками.

*25 сентября 1773 г.*

Секретный Указ Ея императорского Величества самодержавицы Всероссийской от генерал-поручика Оренбургского губернатора Рейнсдорпа Уфимского уезду ближних к Яику реке башкирских волостей верным старшинам и сотникам. На сих днях около Яицкого и Илецкого городков появился нарушитель общаго покоя, злодей, беглой донской казак Емельян Пугачев, которой собрав подобных себе из яицких и илецких казаков партию, около тех городков развязжает и делает пакости и смертные убийства, коего всемерно искоренять должно. И хотя для поиску оного злодея с его товарищами отсель многолюдные команды отправлены, однако ж, для лутчаго в том успеха рассудил я и из вашего народа до пятисот человек туда отправить.

Итак, послав с сим Вам ведамого верного старшину и почтоваго комиссара Мендея Тупеева, поручаю тотчас из команд наших башкирцев до пятисот человек людей хороших и на добрых лошадях для поиску реченных злодеев командировать, и с ним, Мендеем к тем Яицкому и Илецкому городкам прямейшим трактом отправиться и стараться всемерно сию изменническую толпу настичь, разбить, людей переловить, а особливо помянутого Пугачева, за катараго, ежели живой пойман и представлен будет, дано быть имеет награждение денег 500 рублев, а буде мертвый, то 250 рублев, сверх того, имеющейся при них, злодеях, багаж им же отдается...

*Оренбург.*
*Сентябрь 25 дня 1773 г. ЦГАДА.*
*Фонд 1100, д. 2. л. 113."*

Был рапорттан беҙ Исәт провинцияһы менән Өфө өйәҙен ҡушып, Ырымбур губернаһын ойошторған саҡ булыуын күрәбеҙ. Рейнсдорп Йайыҡҡа яҡын башҡорт олостарына мөрәжәғәт итә. Ә беҙ, нигеҙҙә, Йайыҡ буйы олосо. Ҙур хәритәлә ерҙәр ҙә ҙур-ҙур киҫәктәр менән күҙаллана күрһәтмәлә. Күрәһең, күптәнән инде хөкүмәт хеҙмәтендә торған Ям юлы комиссары Мәндей Төпәев менән ул таныш та булғандыр.

Сөнки Рейнсдорп был юл менән Сыбаркүл - Силәбе, Златоуст - Екатеринбург ҡалаһына үтмәй булмаҫ. Йылы, йомшаҡ ерҙә йоҡлатҡан, ашатҡан-эсергән Мәндей Рейнсдорпта яҡшы тәьҫир ҡалдырғандыр. Пугачев ихтилалы башланғас, шуға ла уны тиҙ генә саҡырып алып, ҡулына указ тоттороп, беҙҙең яҡ волостарына сығарып ебәргәндер. Әммә империя властарынан бер игелек күрмәгән халыҡ уға эйәреп полк төҙөп, Пугачевҡа ҡаршы һуғышырға сыҡмаған. Тарих Рейнсдорптың указын тотҡан Мәндейгә эйәреп, Пугачевҡа, Салауатҡа ҡаршы һуғышып йөрөүсе беҙҙең төбәк, беҙҙең район кешеләренән төҙөлгән полкты белмәй.

Мәндей, күрәһең, шул китеүе менән беҙҙең төбәктән мәңгелеккә киткән. Мәҫәлән, ул Нуғай юлынан губернатор Рейнсдорпҡа 1773 йылдың 28 октябрь көнө Пугачевтың указын ебәрә. Губернаторға ул Кинйә Арыҫлановтың, Һеләүһен Кинзиндың халыҡты ҡотортоп йөрөүен, үҙен, Мәндей Төпәевты, саҡ-саҡ үлтермәүҙәрен хәбәр итә.

Мәндей Төпәев беҙҙең төбәктәге Ям юлының ҙур феодалы була. Һәр 25-30 саҡырым һайын ял итеп, ашап алыу шарттары, аттарға урын, бесән, һоло һәм башҡа бик күп хужалыҡ эштәрен башҡарған ул. Бесән, йәнә һоло әҙерләр өсөн аш сәсеү, эшсе көсө, йәшәргә тейешле шарттар тыуҙырыу - үҙе бер оло шөғөл. Өҫтәүенә, мунса, яҡты йөҙ, итмай әҙерләү... Ойоштороу эше етерлек булған, әлбиттә. Һәм бер генә ерҙә түгел.

Ям юлы 1950-1952 йылдарға тиклем эшләне. Әммә ул кешеләрҙе йөрөтөү, йәшәү шарттары тыуҙырыу һәм башҡа бик күп бурыстарҙан азат ителде. Ям юлы буйлап винтовка йәки наган менән ҡоралланған һаҡсы ҡарауылы аҫтында тик почта йөрөтөү булды. Махсус аттар тотоу, уларҙы айырым ашатыу-эсереү инде колхоздарға йөкмәтелде. Мин хәтерләгәндә Ям юлы үҙенең элекке йүнәлешен юғалтҡан ине. "XVIII партсъезд" колхозы Һөләймән, Мулдаш, Көсөк, Һөйөндөк ауылдарын берләштереп, үҙәге һуңғыһында булды. Йәй көнө ҡушлап егелгән, ә ҡышын тәрән көрт һалып, юл тарайғас, осҡа егелгән аттар менән аҙнаһына өс тапҡыр булһа кәрәк, иртә менән Һөйөндөктән Мейәскә 25-30 саҡырым ергә сабырҙар ине.

Хәҙер санаға осҡа егелгән ат менән йөрөүселәрҙе Рәсәйҙә бер ерҙә лә осратып булмайҙыр, моғайын. Осҡа теләһә ниндәй атты егеп булмай. Уны бик күп аттар араһынан һайлап алғандар. Осҡа егелгән ат дилбегәһеҙ тигәндәй йөрөгәс, ул түбәндәге шарттарға яуап бирергә тейеш була. Беренсенән, ул бейә түгел-урта йәштәрҙәге, 6-9 йәштән дә оло булмаған ат. Бик етеҙ. Өркәк түгел. Санала ҡысҡырып бойороҡ биреп ултырған хужаның һәр һүҙен тыңлаусы. Юлды бик яҡшы белеүсе. Үҙ юлын ныҡ тотоп, ҡаршы килеүсегә юл бирмәҫкә тейеш. Элек ослап егелгән ҡыңғыраулы почта аттарына барлыҡ ғәм ситкә сығып юл биреп ҡала ине. Осҡо атты егеү үҙенсәлеге - үҙе бер өлгө. Хәҙер атты ослап егә белеүселәр бик һирәктер.

Почта ҡыуыусы - ир уртаһы ир. Оҙатыусыһы - айырым форма кейгән ҡоралды кеше. Мин иҫләгәндә почта оҙатыусыһы булып 30 йәштәр самаһындағы бик үткер Сәкинә исемле апай барабанлы наган аҫып йөрөй торғайны. Беҙгә, малайҙарға, апай үҙе түгел, наганы ҡыҙыҡ ине. Ҡайһы саҡта барабанынан патрондарын сүпләп алып, беҙгә наганын күрһәтер булды. Наган ҡарар өсөн көндәр буйы колхоз идараһы алдында уны көтөп уйнаныҡ.

Мейәстән тирләп, янып килгән етеҙ почта аттары аҙ ғына туҡтай, ниҙер бушаталар ҙа ете-һигеҙ саҡырым көньяҡта ятҡан Мулдаҡайға сабалар. Мулдаҡайҙа махсус почта - ям йорто. Унда 20 саҡырымдан Поляковка ауылынан "Новый путь" колхозының ерән, аҡ ҡойроҡло, аҡ яллы аттары көтә. Уларҙы Поляковканан Сәфәр йә Илсе ауылы аттары көтөп тора. Шулай итеп, Мейәс менән Учалы араһын, 100 саҡырымдан артыҡ яңы Ям юлын 7- 8 сәғәттә үтә ине почта аттары.

Ям юлының уң саты (Учалы - Мейәс) аттарҙы машина алмаштырғанға тиклем үҙ тәғәйенләнешен юғалтып торҙо. Ул һуғыш юлы тип атала башланы. Сөнки, нигеҙҙә, районыбыҙҙың бөтә яугиры ла һуғышҡа Учалы - Мейәс юлы менән китте. Ул юл Рус - Япон һуғышы, революция һәм Граждандар һуғышы, 1914 йылғы Беренсе Бөтә донъя һуғышы яугирҙарын оҙатты. Күптәре, бик күптәре үҙ еренә шул юл менән кире ҡайта алманы. Тауҙар аша киткән боронғо һуғыш юлы онотолдо. Мейәс вокзалында быуҙарын борҡоп, әсе һыҙғырып ултырған паровоз ҡаҡ вагондарына һуғышҡа китеүселәрҙе тейәп, ашыға-ашыға ҡуҙғалыр булды. Үлемгә киттеләр күбеһе. Мәңгелеккә! "Хуш, Ям юлы!" - тигәндәрҙер бик күптәре эстән генә...

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Аҙағы).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттарҙа ҡош аулауға ҙур иғтибар бирелгән. Бигерәк тә документтарҙа ҡыр өйрәктәрен һәм ҡыр ҡаҙҙарын махсус тотоу урындары булғанлығы теркәлгән. Йылғаға ҡуйылған ау ярҙамында һыу ҡоштарын аулау яҙғыһын башланған. Бының өсөн махсус ярынты һалыу кәрәк булған. Ау ҡоролмаһы ике урман күле араһында йәки күлдең йылға менән тоташҡан урынында, ҡоштарҙың ятраҡан төйәгендә урынлаштырылған. Ҡулайламаны ҡуйыр алдынан һунарсы ҡоштарҙың бер күлдән икенсеһенә күсеү юлын өйрәнгән. Ау ҡыҫҡа булған һәм һыу сығанағының береһенә яҡын булған "алғы торба" һәм оҙон, урман эсенә инеп киткән "артҡы торба"нан торған. Уның киңлеге 16-20 метр тәшкил иткән, оҙонлоғо, топографик шарттарға бәйле, төрлө оҙонлоҡта булған.

Ау ҡороу өсөн ағастарҙы ҡырҡҡас, урынды ҡыуаҡлыҡтарҙан, лапынан таҙартҡандар һәм был майҙан быуындан-быуынға ҡош аулау урыны булараҡ тапшырыла барған. Урман ҡырҡылғас, ҡоштар бер сығанаҡтан икенсеһенә барыу өсөн урман өҫтөнән түгел, ә түбәндән осҡан һәм һунарсының ауына барып эләккән. Ау ваҡ ҡына (4-5 сантиметрлы) ячейкаларҙан торған. Дөйөм ҙурлығы 14х19 метр булған. Ул оҙон ҡаҙыҡтар ярҙамында тарттырып ҡуйылған (һүрәт).



Һунарсы эңер ваҡытында махсус урынға урынлашҡан һәм ҡоштар ауға килеп еткәс кенә уны тартып төшөргән. Был шөғөл бик килемле тип һаналған. Күҙәтеүҙәргә ярашлы, яҙғыһын шундай ысул менән 100-200 өйрәк тотҡандар.

Ҡайһы бер урындарҙа башҡорттар ау һәм сатыр ярҙамында сел, ҡор, һирәк кенә булһа ла ҡаҙҙарҙы һәм өйрәктәрҙе аулаған. Билдәле булыуынса, уҡтан бары тик һыу өҫтөндә булған ҡоштарға ғына атҡандар.

Ҡорға һунарға башҡорттар һыбай йөрөгән һәм ҡарасҡы файҙаланған. Был ысул ҡара көҙҙә, ҡорҙар бер урынға тупланғас, башҡарылған. Күҙгә ташланып торған урындағы ҙур ағасҡа бер нисә ҡор ҡарасҡыһы урынлаштырылған, ә ағас аҫтында һунарсы ултырған. Бер йәки ике һунарсы һыбай килеш ағастарҙа ултырған ҡоштарҙы ҡарасҡы ултырған ағасҡа ҡыуалаған. Бындай һунар ҡышын ҡар ятҡас та башҡарылған. Был осраҡта аттар махсус ҡор санаһына егелгән (һүрәт).



Санала үтеп барыусы һунарсыны ҡоштар үҙҙәренә яҡынлатҡан, ә һунарсы махсус ҡор ағасына ҡорал ҡуйып ҡоштарға атҡан.

XX быуаттың беренсе ун йыллығында башҡорттар бары тик ыласын һәм ҡарсыға менән һәм бары тик ҡыр өйрәктәренә һәм ҡыр ҡаҙҙарына ғына һунар иткән. Бөркөттәрҙе тотһалар ҙа, һунарға сыҡмағандар һәм уларҙы ҡаҙаҡтарға һатҡандар. Ҡоштарҙы өйрәтеү, ыласын булһынмы ул, ҡарсығамы, һунарсының тәүге саҡырыуынан уҡ уның ҡулына килеп ултырыуҙан ғибәрәт булған. Бының өсөн уға бер нисә көн дауамында ашарға ла, эсергә лә бирмәй, ас тотҡандар. Арыҡланған ҡошто һунарсы һул ҡулына ултыртҡан да, уң ҡулы менән уға аҙлап ит биргән. Бер үк ваҡытта махсус саҡырыу өнөн (ҡу-уух) әйткән.

***✓ Шулай ҙа үҙем теләгән тәрбиәнең иң мөһимен биреүгә өлгәштем тип уйлайым: балаларымды туған телдән, туған моңдан, "беҙ" тип әйтерлек күңел һыйыныр мөхиттән айырманым.***



## Мин ҡарт түгел әле…

Етмеш йәш - ул етмеш төрлө уйға һала торған ғүмер юлы. Мин уны ҡартлыҡ тип һанамайым. Ғөмүмән, ҡартлыҡ тураһында минең үҙ фекерем: ҡартлыҡ - ул кеше көнлө булып ҡалыу, уйындағыңды тормошҡа ашыра алмау, зиһен ярып үткән фекереңдең теләнә барып етмәҫ элек юҡҡа сығыуы, ҡулыңдан бер ни килмәү, башҡаларҙың һинең аҡылыңа ҡолаҡ һалмауы, һинең кәңәшеңдән бер кемгә лә кәрәге булмауылыр, тип уйлайым.

Хаҡлы ялға сығыуыма егерме йыл тулды. Биш бала әсәһе булғас, илле йәштән сыҡҡайһың пенсияға. Уйлап ҡараһаң, илле йәш - ул тәжрибә туплап, тупланған тәжрибәләреңдән аҡыл һығып сығарып, ең һыҙғанып эшләр саҡ икән. Күп балалы ҡатын-ҡыҙҙы хаҡлы ялға биш йыл алдан сығарыу, тигән ҡанунды, бәлки, алғараҡ күсереп, балалары бәләкәй саҡта файҙаланыу хоҡуғы бирергә кәрәктер? Сөнки әле илле йәшем тулғандан һуң башҡарған эштәремде барлап ҡараһам, бер генә лә хаҡлы ялда башҡарылған эштәр кеүек түгел улар. Ә бына балаларым бәләкәй саҡта аҙ ғына ҡул бушатыу ни тиклем кәрәк булған! Иң кәрәк мәлдәрҙә балаларым янында аҙ, бик аҙ булғанмын. Ярай әле, аҙ булһа ла ике ялға /элегерәк йәкшәмбе генә ял ине/ күсереү осоро тура килде. Әсәй тәрбиәһен, әсәй хәстәрлеген, өйҙә әсәй ҡулы менән бешерелгән аш тәмен, әсәйҙең өйҙә булыу ҡыуаныс-ҡотон, мәктәптә төрлө ваҡиғаларға тура килеп, әллә ниндәй икеләнеүле уй-кисерештәр менән ҡайтып ингән саҡта әсәй йылмайыуы ҡаршылауын бер ни алмаштыра алмай балаға...

## Үҙем теләгән тәрбиәне бирә алдым…

Шулай ҙа үҙем теләгән тәрбиәнең иң мөһимен биреүгә өлгәштем тип уйлайым: балаларымды туған телдән, туған моңдан, "беҙ" тип әйтерлек күңел һыйыныр мөхиттән айырманым. Ошо маҡсатымды тормошҡа ашырыу өсөн башҡорт мәктәбе астырыу ниәте менән янып йөрөгән зыялыларға әүҙем ҡушылып киттек балаларҙың атаһы Диҡҡәт менән. Балаларым үҫә, башҡалар менән аралаша, донъя кимәленә сыға, төрлө телдәр өйрәнеүгә ынтыла, башҡа милләт мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһына, интернет аша төрлө илдәр, төрлө милләт вәкилдәре менән аралаша башлағас, уларҙан рәхмәт ишетеү, үҙ балаларын да ошо юҫыкта тәрбиәләүе оло шатлыҡ ине. Тимәк, беҙҙең алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа Өфө ҡалаһында башҡорт мәктәбе, башҡорт балалар баҡсаһы, ҡатын-ҡыҙҙар журналы, аҙағыраҡ балалар өсөн журнал тип, ал-ял белмәй, ял итер ваҡыттарыбыҙҙы ошо маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуға сарыф итеүебеҙ бушҡа булмаған, тип ҡыуанам.

## Балаларҙа күңел бушлығы булмаһын

Бөгөнгө байтаҡ йәш атай-әсәйҙәрҙең аң томаланыуы арҡаһында ғәзиз балаларын күңел бушлығына дусар итеүе йәнде ҡыя. Беҙ күпме ваҡытыбыҙҙы, көсөбөҙҙө йәлләмәй, хатта ҡайһы берҙәребеҙ вазифанан ҡолаҡ ҡағыу хәүефен иҫәпкә алмай, милләтебеҙ балаларының киләсәген хәстәрләп йөрөнөк. Өфөлә йәшәгән һәр башҡорт ғаиләһендә тыуып-үҫкән бала үҙ телендә уҡыһын, үҙ мөхитендә тәрбиәләнһен, тәү башлап бөрөләнгән һөйөү хистәрен, идеалын үҙ мөхитендә эҙләһен, ғаилә ҡоролоҡ яртыһын үҙ мөхитенән тапһын, тигән фекер ята ине түрәләргә яҙылған ғаризаларҙың телгә алынмаған өлөшөндә. Ошо маҡсатыбыҙҙы аңлаған өсөн дә туған телдә уҡытыу-тәрбиәләүгә бихисап ҡаршылыҡтарҙы еңеп сыҡтыҡ.

Ләкин радио-телевидение журналистарының күбеһенең, башҡорт телендә нәшер ителгән матбуғат редакциялары хеҙмәткәрҙәренең, туған телдең әһәмиәте тураһында туҡтауһыҙ мәҡәләләр яҙған журналистарыбыҙҙың, әҙәби телебеҙҙең ялғауҙарын үҙгәртеү тураһында бәхәстәр алып барыусы ғалимдарыбыҙҙың (үҙ балалары ниндәй ялғау ҡушып булһа ла башҡортса һөйләшһәсе!), башҡорт теле дәреслектәре авторҙарының, байтаҡ ҡына яҙыусыларыбыҙҙың (үҙ атайҙарының әҫәрҙәрен дә төп нөсхәһендә уҡый алмағандары күп, хатта бер егет әсәһенән: "О чем пишет мой папа?" - тип һораған) балаларының башҡалабыҙҙың иң абруйлы мәктәптәрендә белем алғандан һуң ниндәй шәхестәр булып үҫеп еткәнен күреп торабыҙ ҙа баһа. Был хәлдә аңламау, күрмәү - ысын-ысындан аң аҙашыуы. Бынамын тигән башҡорт уҙамандарының балаларының - абруйлы мәктәптәрҙә белем алып, ҡатнаш ғаиләләр ҡороп, республикабыҙҙа юғары вазифалар биләгән, күҙ терәп торған шәхестәребеҙҙең дә милләтебеҙ өсөн иң хәл иткес осорҙа, иң хәл иткес һүҙ әйтер ваҡытта хәтер ҡалдырған саҡтары аҙ булдымы һуң? Был хәлдәр бит уларҙың дорфалыҡтарынан түгел, ә халыҡ аҡылы ҡаҙанында ҡайнамағанлыҡтан, үҙ милләтенең тарихын, рухи байлығын, ғилемен, фәлсәфәһен белмәгәнлектән (наҙанлыҡтан) килә. Башҡорт мәктәптәрендә уҡығандар үҙ мөхитендә ҡайнай, халҡыбыҙ ижадын, тарихын, йолаларын, йыр-моңон өйрәнә, халҡы булмышы менән ҡыҙыҡһына, уйлана, үҙенсә һығымталар яһай. Иң мөһиме - быуындан-быуынға ҡан аша күсә килгән тәбиғи һәләте уяна.

## Туған телен белмәгәндең мәхрүмлектәре

Туған теленән яҙған кеше, әлбиттә, үҙ халҡының традицияларын, ижадын, халҡының тәрбиә ҡанундарын белмәй. Ят традицияны үҙләштереүе лә икеле. Халыҡ тәрбиәһе тупланған халыҡ ижады һәр кешегә рухи үҫеш өсөн ағасты үҫтерер һут, һыу һымаҡ кәрәк. Туған теленән яҙған кеше был байлыҡтан мәхрүм ҡала. Ә фәҡәт матди байлыҡ ҡына хәстәрләп, милләттәштәрендән үҙенде ни яҡтандыр өҫтөнөрәк күрһәтергә тырышыу кешенең аңын томалай. Өҫтәүенә, балаларының киләсәк яҙмышы аяныслы.

Беренсенән, туған тел - аралашыу ҡоралы ғына түгел. Ул ҡанға (генға) һалынған, быуындан-быуынға күсә килгән һәләтте үҫтереүсе төп шарт. Ҡан хәтерен уятыусы ла, һәләтте асыусы ла, үҫтереүсе лә - туған тел. Балаларыбыҙҙы туған телдән яҙҙырып, әллә ниндәй һәләттәрен юҡҡа сығарабыҙҙыр әле.

Икенсенән, туған тел - ул туған моң. Ә туған моң - нерв күҙәнәктәрен дауалаусы төп сараларҙың береһе. Тәбиғәт беҙгә моңдо, йырҙы, шиғриәтте, башҡа төр сәнғәтте күңел дауаһы итеп бар иткән. Туған телһеҙ ҡалған кеше күңел дауаһын ниҙән алыр, ниндәй телдә йырлар? Тәбиғәттең өйрәнелеп бөтөлмәгән серле бүләге бит ул күңел дауалаусы туған моң. Өҫтәүенә, туған телһеҙ ҡалған кеше фәҡәт матди байлыҡҡа ғына ҡыҙығасаҡ, уға туған халҡының рухи байлығы кәрәкмәй ҙә, аңы томаланыу арҡаһында уның кәрәклеген аңламай ҙа. Үҙ телендә китап, ваҡытлы матбуғат нәшер итеүҙе, мәктәптәр, театрҙар асыуҙы, радио-телевидение булдырыуҙы, кино һәм башҡа сәнғәт үҫешен тәьмин итеүҙе талап итмәйәсәк ундай рухһыҙ кеше.

Ә рухһыҙҙар, йәғни үҙҙәренә рухи аҙыҡ булырлыҡ ҡиммәттәргә мохтажлыҡ тоймаған аңы томаланған кешеләр - бик арзан эш көсө, улар менән эш итеүе еңел. Профессор булһынмы, юғары вазифа биләһенме йәки хәҙерге заман байымы, ихата йыйыштырыусымы - рухи ҡолға тиң бындай кешеләр фәҡәт башҡа милләттең рухи үҫеше өсөн матди байлыҡ булдыралар. Үҙ балаларының киләсәге хаҡында ла уйламайҙар, уларҙың ниндәй милләткә хеҙмәт итерен, үҙҙәре туплаған матди байлыҡтың кемгә тороп ҡалырын да уйламайҙар.

Бына ошондай арзан хеҙмәтселәрҙән торған киләсәк булдырырға тырышыу ул - туған телдән яҙҙырырға маташыу.

## Ата-әсә аҙашыуҙары

Туған телдән яҙҙырыу сәйәсәте авторҙары кеше психологияһын шул тиклем яҡшы белә һәм күнелендәге иң нескә ҡылдарына сиртеп, аңына тәьҫир итеү ысулдары менән алып бара.

Иң беренсе ысул - бала мәнфәғәтенән сығып эш итеү. Һәр кеше өсөн бала ғәзиз. Баланың бәхетле, белемле булыуы - һәр атай-әсәйҙең төп маҡсаты. Хатта баланың һаулығы ла икенсе сиратҡа ҡала. Ә белемле булыуҙың төп шарты - был сәйәсәт авторҙары аңлатыуынса, рус телен белеү. Әлбиттә, рус телен яҡшы белергә кәрәк, әммә туған тел иҫәбенә түгел. Шуның өсөн беҙгә тәбиғәт тарафынан әллә нисә тел белеү мөмкинлеге бирелгән.

Был - атай-әсәйҙәрҙең төп аҙашыуы. Икенсе аҙашыу осрағы - баланың туған телде белеп үҫеүен яҡшы аңлаған атай-әсәйҙәр аҙашыуы. Улар: "Беҙ балабыҙ менән өйҙә башҡортса аралашабыҙ. Ә Өфөләге башҡорт мәктәптәрендә көсһөҙ уҡытыусылар уҡыта", - тиҙәр. Баш ҡала, әлбиттә, һайлап алырлыҡ маҡтаулы мәктәптәр, гимназиялар бихисап. Ундай уҡыу йорттарында баланды уҡытыу ниндәйҙер мәртәбә һанала. Хатта: "Балаң ҡайҙа уҡый?" - тип һорағанда, ниндәйҙер бер ғорурлыҡ һәм өҫтөнлөк менән 3-сө, 35-се, 39-сы һәм башҡа гимназияларҙы атайҙар. Әлбиттә, яҡшы даны таралған маҡтаулы уҡыу йорттары улар. Беренсенән, борондан абруйлы һаналған, икенсенән, һәр етешһеҙлеген төймәләйҙе дөйәләй итеп ҡабартып таратып ебәреүселәре (башҡорт мәктәптәре тураһындағы лаҡаптар кеүек) юҡ. Өсөнсөнән, һәр атай-әсәй,

# ЕТМЕШ ТӨРЛӨ УЙЫМ...



***Бөгөнгө байтаҡ йәш атай-әсәйҙәрҙең аң томаланыуы арҡаһында ғәзиз балаларын күңел бушлығына дусар итеүе йәнде ҡыя. Беҙ күпме ваҡытыбыҙҙы, көсөбөҙҙө йәлләмәй, хатта ҡайһы берҙәребеҙ вазифанан ҡолаҡ ҡағыу хәүефен иҫәпкә алмай, милләтебеҙ балаларының киләсәген хәстәрләп йөрөнөк. Өфөлә йәшәгән һәр башҡорт ғаиләһендә тыуып-үҫкән бала үҙ телендә уҡыһын, үҙ мөхитендә тәрбиәләнһен, тәү башлап бөрөләнгән һөйөү хистәрен, идеалын үҙ мөхитендә эҙләһен, ғаилә ҡоролоҡ яртыһын үҙ мөхитенән тапһын, тигән фекер ята ине түрәләргә яҙылған ғаризаларҙың телгә алынмаған өлөшөндә. Ошо маҡсатыбыҙҙы аңлаған өсөн дә туған телдә уҡытыу-тәрбиәләүгә бихисап ҡаршылыҡтарҙы еңеп сыҡтыҡ.***

был уҡыу йорттарының патриоттары булараҡ, ғәйебен түгел, ыңғай яғын күрергә ғәҙәтләнгән.

Өсөнсө төр аҙашыу. Атай-әсәйҙәрҙең был аҙашыуы туған телдең әһәмиәтен бөтөнләй аңламауҙан килә. Улар: "Туған тел нимә бирә? Ана урамдағы урам һепереүсе бына тигән башҡортса һөйләшә, ә ярлы йәшәй. Мин туған телемде белмәһәм дә бөгөнгө көндә йәнем ни теләй - шул байлығым бар", - тигән ҡарашталар.

## Ә бит балаға үҙ мөхите кәрәк…

Күҙәтеүҙәремдән сығып, шуны әйтә алам. Балаға белем алыу усағынан тыш, күңеленә йылылыҡ һирпелеп торған "беҙ" тигән мөхит кәрәк. Ә ундай мөхиттең бик ҙур әһәмиәткә эйә икәнлеген уйлап та бирмәйҙәр атай-әсәйҙәр. Бала фәҡәт үҙ ҡалыбында, үҙ мөхитендә үҫһә генә тулыһынса асыла. Үҙ моңон, туған тел моңон ишетеп үҫһә, ҡан (ген) аша ете быуындарынан күсә килгән әллә ниндәй һәләттәре асылып китә. Ят моң һәләт (талант) күҙәнәктәрен уята алмай. Ят мөхиттә күңеле үҙ иткән дуҫтар таба алмай. Иптәштәре күп булыр, әммә ғүмерлек дуҫ үҙ бауырың араһында ғына була. Былар ҡоро һүҙ түгел.

Ун биш йылдан ашыу инде балалар өсөн "Йәйләү" ял итеү үҙәге эшләп килә. Унда төп үҙенсәлек - башҡорт мөхите. Рус гимназияларында уҡыған башҡорт балаларының "Йәйләү"ҙә иркен йылғаға ебәрелгән балыҡтай, һауалағы ҡоштай рәхәтләнеүен, башҡортса йырларға, бейергә, шиғыр һөйләргә дәрттәренең ташып тороуын, киске уйындарҙа башҡорт көйҙәренә дәртләнеп бейеүҙәрен, күҙҙәрендә осҡонланып киткән нурҙы атай-әсәйҙәре күрһә һәм балаһының ниндәй бәхеттән мәхрүм ителгәнлеген аңлаһа икән! Ә балалар үҙҙәре ниндәй байлыҡтан мәхрүм ителгәнлеген аңлай һәм байтаҡтары башҡорт мәктәптәренә күсә, йыл буйы "Йәйләү"ҙе онота алмай һағынып һөйләй. Балаға мөхит кәрәк. Туған рухлы, туған традициялы дуҫтар, тиңдәштәре, беҙ тип әйтерлек мөхит кәрәк. "Йәйләү" бик аҙ ғына ваҡытҡа уларға ошо мөхитте тыуҙыра.

## Шәжәрәңде кем дауам итә?

Бәхеттең матди байлыҡта ғына түгеллеген барыбыҙ ҙа белә. Кешегә ер ҙә кәрәк, һауа ла кәрәк. Йыр ҙа, күңел дауаһы ла кәрәк. Кеше ғүмере буйы йәш булып ҡалмай. Олоғая килә ҡан хәтере уянып китә, кеше үҙен эҙләй, үҙ моңон, үҙ мөхитен һағына башлай. Шул саҡта йәшлек хатаһын аңлай, әммә һуң була. Кемгә үпкәләргә, кемгә асыуланырға, ни тип аҡланырға белмәй. Телен юғалтҡан беренсе быуын ни юғалтҡанын, ни һағынғанын аңлай, сөнки үҙ ихтыяры менән үҙ мөхитенән ситләшә, ә икенсе, өсөнсө быуын үҙ мөхитендә юғалтыуҙан, үҙ тамырынан йолҡоп алыныуҙан, "беҙ" тип әйтерлек милләттәштәрең булмауҙан килгән үҙәк өҙгөс бушлыҡ тойһа ла сәбәбен аңлай алмай. Иң әсенеүлеһе - һинең ҡаныңда ете быуындан күсә килгән һәләтең асылмай ҡалыу сәбәпле башланған күңел бушлығы ла тынғылыҡ бирмәүе ихтимал. Был да уның эсен бошора, йөрәген өҙгөсләй.

Халыҡ - төрлө-төрлө шәжәрә-ағастарҙан торған урман. Улар араһында бик тәрән тамырлы, йыуан олонлолары бар. Әммә тарбаҡ ботаҡтарҙың төбөнә шул ботаҡта ултырыусылар үҙҙәре үк балта саба. Ботаҡтарынан мәхрүм олон һерәйеп ултырып ҡала. Тәрәнгә киткән тамырҙар ҙа, йыуан олон да ҡотҡара алмай.

Тамырҙары ла тәрән, олоно ла йыуан, ботаҡтары ла тарбаҡ ағастар бар. Әммә япраҡтарын ҡорт ашай. Япраҡһыҙ ҡалған ағас яйлап-яйлап ҡороуға дусар. Яланғасланып ҡалған япраҡһыҙ ағастарҙы туған тел мөхите булмаған ғаиләләргә оҡшатам.

Ботаҡтары ла ҡуйы, йәм-йәшел генә ағастарҙың тирә-яғында йәм-йәшел генә булып шытып килгән үҫентеләрҙе күрһәм, йөрәгем йылынып китә.

Балаһын туған теленән, моңонан, туған мөхитенән, рухи байлыҡтан айырған атай-әсәйҙәр ошо хаҡта уйлаһындар, үҙҙәренән өлкәнерәк быуындың аҙашыу сәбәптәренә күҙ һалһындар ине.

Өфөлә башҡорт мәктәптәре асып, күпме балалар рухһыҙлыҡтан ҡотҡарылды. Ни тиклем оло эш башҡарылды. Туған мөхитле мәктәп булған көйө, ниндәйҙер сәбәп, етешһеҙлек эҙләгән булып, балаңды күрәбаға мөхитһеҙ, тимәк, рухһыҙ ҡалдырыуҙы бер нисек тә аңлай алмайым. Башҡорт мәктәптәрендә уҡытыусыларҙың белемһеҙерәк, башҡорт гимназияларының хөртөрәк булыуына һылтаныу үҙеңдең яңылышлығыңды аҡлау ул. Башҡорт мәктәптәрен тамамлаусылар ҙа, башҡалар кеүек, илебеҙҙең төрлө юғары уҡыу йорттарына инәләр. Хәҙер бит интернет заманы. Белемде өйҙә ултырып та алып була. Ә бына туған мөхитте, күңел берлеге тойорлоҡ дуҫтарҙы, йөрәгеңә яҡын бауырҙашты интернет аша булдырып булмай.

Етмеш төрлө уйланыуҙарымдың бер юҫығын ғына, йәш атай-әсәйҙәр уйланһын ине, тигән өмөт менән тамамлайым.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күренекле яҙыусы Мәрйәм апай Бураҡаеваны, "Киске Өфө"нөң даими авторын, дуҫын, рухташын, юлдашын коллективыбыҙ һәм меңәрләгән уҡыусыларыбыҙ исеменән 70 йәшлек юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ. Оҙаҡ-оҙаҡ йылдар ил инәһе, милләт ағинәйе булып, ижад емештәре менән һөйөндөрөп, һау-сәләмәт йәшәргә яҙһын, тип теләйбеҙ.**

*кинәйә*

# БӘХЕТЛЕ БУЛАЙЫҠ...

## бөгөн дә, иртәгә лә



**Психология күҙлегенән, кешеләргә иртәгәге көнгә ышаныс күпкә мөһимерәк: тап иртәгә яҡшыраҡ йәшәү өсөн эшләйбеҙ, ниндәйҙер уңайһыҙлыҡтарға күнәбеҙ, матур киләсәккә ышанабыҙ һәм ҡайһы бер нәмәләрҙән үҙебеҙҙе мәхрүм итәбеҙ. Ә бөгөнгө көндө күрмәйбеҙ ҙә… Психологик проблемалар араһында "ситкә ҡуйып торолған тормош синдромы" тип йөрөтөлгәне бар. Ул ике төрлө сценарий буйынса үҫешә: кеше йәки бер маҡсатҡа үҙен тулыһынса бағышлай һәм тормоштоң башҡа яҡтарын күрмәй, йәки башҡаларҙың эргәһендә барған ваҡиғалар менән йәшәй һәм үҙенең шәхси тормошонда үҙгәрештәр үҙенән-үҙе барлыҡҡа киләсәгенә ышана. Шуныһы ҡыҙыҡ, психологтар әйтеүенсә, быңдай йәшәү рәүеше күптәр өсөн уңайлы ла, сөнки бөгөнгө көн менән йәшәмәүсе кеше ысынбарлыҡтағы проблемаларҙан да, конфликттарҙан да ҡаса, үҙенең һәм ғаиләһенең тормошо өсөн яуаплылыҡ тойғоһо кисермәй. Уның өсөн быларҙың барыһы ла иртәгә, уның иң серле хыялы, маҡсаты тормошҡа ашҡас башланасаҡ. Ысынбарлыҡта, беҙ барыбыҙ ҙа иртәгәге көн менән йәшәйбеҙ түгелме һуң? Шулай ҙа был ыңғаймы, әллә кире күренешме? Ошо һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ.**

**Гөлсирә ӨМӨТБАЕВА, уҡытыусы:** Әлбиттә, үҙеңдең алдыңа маҡсат ҡуйыу, ниндәйҙер хыял менән йәшәү яҡшы. Әммә тормошоңдо сиге булмаған генераль репетицияға әүерелдерергә лә ярамай. Был күренештең феномены шунда: йәшәй башларға әҙерләнеү оҙаҡҡа һуҙылыуы һәм һөҙөмтәлә бер нәмә лә үҙгәрмәү ихтималлығы бар. Әгәр ҙә мин быны саҡ ҡына алдараҡ аңлаған булһам, тормошом бөтөнләй икенсе булыр ине, тип уйлайым. Хәҙер, ошо минутта бәхетле була белмәйбеҙ, ысын тормош ябыҡҡас, машина, фатир, тун һатып алғас, кейәүгә сыҡҡас башланасаҡ тип яңылышабыҙ. Үткәндәр тураһындағы хәтирәләр һәм киләсәк тураһындағы хыялдарҙан үҙебеҙгә ҡабырсаҡ эшләп алабыҙ ҙа, шунда йәшәй бирәбеҙ, сөнки шулай күпкә уңайлыраҡ. Үткәндәр тураһында уйлаһаң, башҡа иң тәүҙә уңышһыҙлыҡтар, үкенестәр, бойомға ашмаған өмөттәр хаҡындағы уйҙар инә башлай, уның күләгәһе киләсәккә булған хыялдарҙы ла ҡараңғылатып ебәрә. Әкиәттәге кеүек - ни тиклем арыраҡ атлаған һайын, шул тиклем ҡурҡынысыраҡ. Үҙебеҙҙе башҡалар менән сағыштырыу, башҡалар кеүек йәшәргә ынтылыу ҙа тормошобоҙҙо күркәмләндермәй. Быларҙан ҡотолоу өсөн бөгөнгө көн менән йәшәргә өйрәнергә һәм бәләкәй генә шатлыҡтарға - ҡояшлы көнгә, уңышлы килеп сыҡҡан эшкә ҡыуана белергә кәрәк. Туғандарығыҙ, дуҫтарығыҙ менән аралашығыҙ, эштә оҙаҡ ултырмағыҙ, театр, концерттарға йөрөгөҙ. Ошолай бер нисә көн йәшәгәс, эргәгеҙҙәге бар нәмәнең дә үҙгәреүен тоясаҡһығыҙ, сөнки тормошта мөһим булмаған моменттар юҡ һәм һеҙҙе шатландырған бәләкәй генә һөҙөмтә лә уны бөгөн үк үҙгәртергә мөмкинлек бирәсәк.

**Әлифә ҺАБАНҒОЛОВА, банк хеҙмәткәре:** Яңыраҡ танышым бер күңелһеҙ ваҡиға шаһиты булыуы тураһында һөйләгәйне. Оло йәштәге күрше апай вафат булғас, уның үтә лә хәлле тормошта йәшәгән ҡыҙы әсәһенең фатирынан бер тапҡыр ҙа тотонолоп та ҡаралмаған һауыт-һабаны, сәй сервиздарын төргәге менән бергә ихаталағы сүп һауыты эргәһенә өйгән, йәнәһе, сынаяҡтар моданан сыҡҡан. Ошоно күргәс, өйөмдә бары тик ҡәҙерле ҡунаҡтарға, ҙур байрамдарҙа тотоноу өсөн генә һаҡланған һауыт-һабаны, алтын ялатылған ҡалаҡтарҙы шкаф башынан төшөрөп, саңын һөртөп, көн һайын тотона башланым, хатта ирем тәүге мәлдәрҙә, ҡунаҡтар көтәбеҙме әллә, тигән һорау биреп йонсотто, тигәйне ул. Бына шулай ҡасан тормоштоң ниндәйҙер айырым осраҡтарҙан ғына тормауын, ә бөгөнгө көн дә барлығын аңлаясаҡбыҙ, шул саҡта ғына үҙебеҙҙән ҡәнәғәт буласаҡбыҙ. Арабыҙҙа матур затлы күлдәген киймәйенсә, танышым кеүек, һауыт-һабаһын тотонмайынса, уларҙы нимәгә һаҡлағанын үҙе лә белмәйенсә ғүмерен әрәм итеүселәр күпме! Талаптарыбыҙҙы ҙурайтабыҙ, шул уҡ ваҡытта кешелеклелек сифаттарын юғалтабыҙ, кемгәлер үпкәләйбеҙ, рәнйейбеҙ, ә үҙебеҙ яҡшыраҡ булырға ынтылмайбыҙ. Бөгөн һуңғы көн йәшәгән кеүек йәшәгеҙ, иртәгә булмай ҡуйһа, бөгөнгө көн менән һин башҡаларҙың хәтерендә ниндәй булып ҡаласаҡһың, шул турала ла уйларға кәрәк.

**Динар ХӘЙБУЛЛИН, аспирант:** Яңы йылдан, дүшәмбенән яңы тормош башлайым, тип уйлау ҙа тап бөгөнгө көн менән йәшәй белмәүҙән килә. Мин үҙем дә ошолай йәшәй инем. Ҡулыма Девид Карнегиҙың китабы килеп эләккәнгә тиклем. Унда бик файҙалы программа бар. Уны үтәүҙә бер ниндәй ауырлыҡ та юҡ. Иң тәүҙә, мин бөгөн бәхетлемен, тип уйларға өйрәнергә кәрәк. Сөнки бәхетле булырға теләгәндә генә бәхетле булып була. Бәхет үҙебеҙҙә, ул бер ниндәй тышҡы ваҡиғалар һөҙөмтәһе була алмай. Икенсенән, бер кемде лә, бер нәмәне лә үҙгәртергә маташмағыҙ. Ғаиләгеҙҙе, эшегеҙҙе, төрлө ваҡиғаларҙы нисек бар, шулай ҡабул итегеҙ һәм уларға үҙегеҙ яраҡлашығыҙ. Сәләмәтлегегеҙ тураһында бөгөн ҡайғыртығыҙ, дөрөҫ туҡланығыҙ. Рухи үҫеш килтерә торған эштәрҙе онотмағыҙ. Тап бөгөн барыһына ла яҡшы теләктә булығыҙ, килешкән кейемегеҙҙе тап бөгөн кейегеҙ, тыныс тауыш менән һөйләшегеҙ, маҡтау һүҙҙәрен күберәк әйтегеҙ, бер кемде лә әрләмәгеҙ, ғәйбәт һөйләмәгеҙ. Шулай уҡ көндәлек эштәрҙе ваҡытын билдәләп яҙып ҡуйыу ҙа файҙалы. Был һеҙҙе ике яуызлыҡтан - ҡабаланыуҙан һәм икеләнеүҙәрҙән ҡотҡарасаҡ. Бәхет һәм тыныслыҡта йәшәргә теләһәгеҙ, тағы бер мөһим ҡағиҙәне хәтерегеҙгә һеңдерегеҙ: гел ыңғай уйҙар уйлағыҙ, тормошто яратығыҙ һәм күп тә үтмәй, һеҙ тап шундай шат күңелле кешегә әүереләсәкһеҙ. Ышанмаһағыҙ, тикшереп ҡарағыҙ, быының бер ауырлығы ла юҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙенең халҡын бәхетле итергә теләгән батша кәңәш һорап, аҡһаҡалдарға мөрәжәғәт иткән. Аҡһаҡалдар уға өс һорау биргән: был донъяла ҡайһы мәл иң мөһиме, ниндәй кеше иң кәрәклеһе, ниндәй эш иң яҡшыһы? Батша был һорауҙарға яуап бирә алмаған. Ә улар бик ябай ғына булған: иң мөһим мәл - әлеге ваҡыт; иң кәрәкле кеше - әле һинең янында булғаны; әле һин башҡарған эш - иң яҡшыһы. Аңлағанға - кинәйә, ти, халыҡ, ошо аҡылды иҫтә тотоп, хәҙер, ошо мәлдә йәшәргә өйрәнәйек. Бөгөн һәм, әлбиттә, һәр ваҡытта бәхетле булығыҙ һәм быының ҡәҙерен белегеҙ!**

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

*✓ Мин дә һиндәй генә сағымда ситкә сығып киткәйнем. Әммә һинең һымаҡ сәскәләй йәш сағымды кире ҡайтарып булһа, Наҙгөл ҡыҙым, Башҡортостанымдан бер ҡасан да, бер аҙым да ситкә китмәҫ инем...*



Поезд ҡуҙғалырға ярты сәғәт самаһы ҡалғас, Зәлифә үҙенең вагонына инде. Урынын табып алды ла, ярайһы ғына ауыр сумкаһын аҫҡы кәштәгә ҡуйҙы. Утыҙ йылдан ашыу күрешмәгән Сәлимә әхирәтенә ҡунаҡҡа китеп бара ул. Май, ҡаймаҡ, ҡорот һымаҡ бергилке ауыл күстәнәстәре һалғас, шаҡтай ауырайҙы ла китте сумкаһы. Өҫтәүенә, ҡыш мизгеле булыуын файҙаланып, бер аҙ туңдырылған ит тә һалып алғайны. Вагондағы башҡа пассажирҙарға иғтибар итмәй, ултырған килеш эстән генә ниндәйҙер доға уҡыны. Илле йәште аша атлауына ҡарамаҫтан, әле лә һылыулығын юғалтмаған. Дөрөҫөрәге, унның йөҙөнә ҡарап, йәш сағында бигерәк тә сибәр булғандыр, тип фаразларға була. Күҙе-ҡашына бер төрлө лә буяу-фәлән яғылмаһа ла, йөҙөндә үҙенә генә хас тәбиғи матурлыҡ сағыла. Ниндәй йәштә булыуына ҡарамай, мөләйем сырай ҙа кешене шулай матурлай, ахырыһы. Доғаһын уҡып бөтөп, устары менән битен һыйпап алғас ҡына тирә-йүндәгеләргә күҙ йөрөтөп алды. Ҡаршыһында ултырған ун ете-ун һигеҙ йәштәрҙәге ҡыҙға ҡарап йылмайып иҫәнләште лә, бер-ике секунд эсендә уны баштан аяҡ байҡай һалып алды. Унның төҫө-башы ҡала ҡыҙҙарынан бер ни менән дә айырылмауына ҡарамаҫтан, ни өсөндөр, ауыл ҡыҙылыр, тип уйланы.

- Ҡайҙа юл тоттоң, ҡыҙым? - тине Зәлифә тик әсә кешегә генә хас була торған йомшаҡ тауышы менән.

- Өфөгә, - тине ҡыҙ бер аҙ йылмайып. - Унан, самолет менән Мәскәүгә осорға тейешмен.

- Ә-ә-ә, улай икән, - тип һуҙҙы Зәлифә. - Оҙон ғына юлға сыҡҡанһың икән, ҡыҙым, хәйерлегә булһын, исемеңһау йөрө. Уҡып йөрөйһеңмә унда?

Ҡыҙ интернет аша үҙенә оҡшаған эш тапҡанын, телефондан эш хужалары менән килешеп, ана шул эшкә урынлашыу ниәте менән баш ҡалаға китеп барғанын әйтте. Улар, шулай, күптәнге таныштарҙай, һөйләште лә киттеләр. Проводник билеттарҙы тикшергәс, поезд һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә ҡуҙғалды ла, әкренләп тиҙлеген арттыра башланы.

-Эш хаҡын арыу ғына вәғәҙә итәләр. Башҡортостанда эш табыу мәсьәләһе ауыр бит, - тип ҡыҙ, оло кеше һымаҡ итеп, һығымта яһап ҡуйҙы.

- Эш табыу ҡыйын, тиһең инде, ҡыҙым, исемең кем әле?

- Наҙгөл...

-Ҡарәле, Наҙгөл ҡыҙым, - Зәлифә уйланып алды, - Улар нимә генә вәғәҙәләмәҫ... Әммә ситтә йөрөгәндә һаҡ бул. Бер ҡатлыланып, ҡапыл да кешеләргә ышанып бирмә.

-Юҡ, апай, улар бигүк ышанмаҫлыҡ кешеләргә оҡшамаған. Телефон аша әҙәпле икәндәре һиҙелеп тора. Һәр ҡайҙа ла беҙҙең һымаҡ кешеләр бит...

-Ә-әй, әле йәшһең шул. Үтә лә ябай, бер ҡатлы икәнең күренеп тора. Мин дә ҡасандыр тап һиндәй генә сағымда ситкә сығып киткәйнем. Әммә һинең һымаҡ сәскәләй йәш сағымды кире ҡайтарып булһа, Наҙгөл ҡыҙым, Башҡортостанымдан бер ҡасан да, бер аҙым да ситкә китмәҫ инем... - Зәлифә бер аҙ һағайып ҡалды, "Сеү, ҡыҙым", тип, һуҡ бармағын күтәреп ишараланы ла, ултырған урынынан ҡалҡына биреп, вагон радиоалғысының борғосона үрелде...




Радионан ағылған илаһи, күңелдәргә үтеп инерлек моңло йыр көсәйә төштө:

Зәлифәкәй ҡайҙа - гөлбаҡсала,

Һыу һибә лә Зәлифә баҡсаға.

Зәлифәкәй һылыу ни хәл итһен,

Үҙ ағаһы һатҡас та аҡсаға...

Зәлифәнең күҙҙәре һағышланды. Моңһоу күҙҙәргә мөлдөрәмә булып тулған, бынабына бите буйлап ағып китергә торған йәшен ҡулъяулығы менән һөртөп алды. Ниҙер күрергә теләгәндәй, ҡарашын ҡайҙалыр алыҫҡа төбәне лә тынып ҡалды. Быуаттар аша ошо көндәргәсә онотолмайынса халыҡ күңелендә һаҡланып килгән һәр башҡорт йыры һымаҡ, был йырҙың да үҙенә генә хас хикмәте бар ине шул. Кешеләрҙең, башҡорт кешеләренең аяныслы тормошо сағылған ошондай йырҙар ғына бик оҙаҡ йылдар быуындан-быуынға тапшырылып килә торғандыр...

Тыныс ҡына тыңлап булмай торған, үҙәк өҙгөс көй тәьҫирендә йәш юлдашы Наҙгөлгә үҙенең гөлдәй йәш сағын бәйән итте һылыу ҡатын. Илдән ситкә киткән башҡорт ҡыҙҙарын күргән-ишеткән һайын һәр саҡ үҙенең тормош юлын күҙ алдынан үткәрә ул...

* * *

Мәскәү арьяғындағы Лакинский ҡалаһына эшкә барырға уны күрше ауылдан синыфташы Сәлимә өгөтләгәйне. Үҙ ғүмерендә хатта яҡындағы Сибайҙа ла барыһы бер-ике мәртәбә булған Зәлифә өсөн Владимир өлкәһендәге ҡала ер сигендә ятҡан һымаҡ тойолдо. Русса ла яҡшылап һөйләшә белмәгән, быйыл ғына урта мәктәпте тамамлаған был ябай ауыл ҡыҙына әхирәте һис тә тормошҡа ашмаҫтай тәҡдим яһаған һымаҡ булды.

-Ҡурҡма, унда беҙҙән башҡа ла башҡорт ҡыҙҙары бик күп. Ике туған апайым да шул туҡыу фабрикаһында мастер булып эшләй. Урыҫ әҙнәм менән йыл да отпускиға килеп торалар...

- Урыҫ?..

- Эйе, урыҫ. Урыҫ булһа, ни булған? Апайым хәҙер үҙе урыҫыңды һатып ебәрерлек. Балалары ла тик урыҫса ғына һөйләшә. - Сәлимәнең йөҙөндә ғорурлыҡ сатҡылары һиҙелде.

- Әйҙә, Зәлифә, оҙаҡ уйланырға ваҡыт юҡ. Апайым, бер-ике дуҫыңды ла алып кил, тине. Аҡсаны көрәп алаҫаҡбыҙ, Зәлифә, әйҙә инде... Барған көндә үк дөйөм ятаҡтан урын бирәсәктәр.

Был "ыҫмала" Сәлимә бер һөйбешһә, ыҫҡындырып алырмын тимә. Күндерҙе. Телгә оҫта был ҡыҙый хатта Зәлифәнең ҡапыл да әллә ни бирешеп бармаҫтай әсәһен дә нисектер бик тиҙ генә ризалаштырҙы.

-Ай һайын ҡыҙыңдан посылкалар ғына алып ятаҫаҡһың, Рабиға апай, бына күрерһең...

Биш ҡыҙ, бер ул тәрбиәләп үҫтергән әсә ул Рабиға апай. Әллә шуның өсөн дә инде, үҙенең ҡыҙҙарына ҡарата үтә лә ҡаты. Балаларына өгөт-нәсихәт уҡығанда, аҡыл өйрәткәндә, йә иһә берәй насар эштән тыйған саҡта һәр ваҡыт шулай мәтрүлеп бармаҡ янай. Зәлифәгә лә янаны...

Ысынлап та, дөйөм ятаҡта сәйнүк, таба, йә икенсе берәй һауыт-һаба тотоп, ятаҡ коридорында "Беренсе мөхәббәт"-те, "Әсәйемә"не көйләп китеп барған, дөйөм кухняла ниҙер бешерепеп йөрөгән башҡорт ҡыҙҙары күп булып сыҡты. Гөлниса апаһында фатирҙа тороу мөмкинлегә булыуға ҡарамаҫтан, Сәлимә лә Зәлифә менән бер бүлмәнән урын алды. Бөрйән ҡыҙы Гөлбәзир ҙә уларҙың бүлмәһенә урынлашты. Өсәһе лә мотальщица эшенә ғариза яҙҙылар. Тәүҙә тәжрибәле эшсе янына беркетелгән ҡыҙҙар бөрәр ай уҡыусы булып һаналып йөрөгәндән һуң, тейешенсә имтихан бирҙеләр ҙә, башҡа ҡыҙҙар һымаҡ уҡ, һин дә мин эшләп алды ла киттеләр. Эш хаҡын, ысынлап та, яҡшы ғына түләйҙәр ине. Тәүге хеҙмәт хаҡын алған көнөн бик яҡшы хәтерләй Зәлифә. Хатта ғүмер буйы колхозда бил бөккән атаһының да өйгә шунсама аҡса алып ҡайтҡанын күргәне юҡ. Йөҙ илле һум! Шундуҡ универмаг, универсам тип аталған ҡала магазиндарына сығып, әсәһенә, атаһына һәм башҡа туғандарына бүләктәр һатып алды. Сиратта оҙаҡ ҡына тороп, ул саҡта айырыуса дефицит тип һаналған, тышына фил һүрәте төшөрөлгән һинд сәйен дә алыуға өлгөште хатта. Посылка алған әсәһенең нисек һөйөнөүе хаҡында яҙған хатын уҡып бик тә ҡыуанды.

Эш, әлбиттә, әллә ни еңелдән түгел ине. "Оҙон" аҡсаны ла юҡҡа ғына түләмәйҙәр шул. Айырыуса төнгө эш сәғәттәре бик тә оҙайлы булып тойола. Станок артында яңылыш йоҡлап китеп, ҡулың тимер ҡуласалар араһына инеп китеү ҡурҡынысы ла булған эштә ауыл ҡыҙҙары бирешмәне шулай ҙа. Ауыр эшкә күнекмәгән күптәр, айырыуса ҡала ҡыҙҙары, бер аҙ ваҡыттан һуң өйҙәренә кире ҡайтып та киткеләне.

**(Дауамы бар).**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




# ТАЙМАҪ МӘҘӘКТӘРЕ

### Әхтәм абзый аптырамай...

Әхтәм абзыйҙың кәмендә 50 йәшлек "ИЖ-49" мотоциклы була торғайны. Трактор деталдәрен ҡуйып эшләп алғайны уны. Ҡышын аэросана яһап та һунарға йөрөнө. Двигателен, әйтерһең дә, япондар эшләгән, тауышы ла сыҡмай. Әхтәм абзыйҙы бер күргәндә:

-Был мотоцикл нисек йөрөй ул? Унда бит трактор деталдәре ҡуйылған? - тип һораным.

- Эйе, мырҙам, йөрөй инде ул, йөрөй. Бер ваҡытта ла бензин һалғаным юҡ. Бер аҙ ҡайнаған һыу ҡушып, кәрәсин һалам да, әйҙә инде.

Әхтәм абзый байтаҡ йылдар ауылда тимерлектә эшләне. Йыш ҡына төшөрһә лә, унның иҫерек йөрөгәнен күрмәнеләр. Шулай ҙа төрттөрөүселәр табылып торҙо. Бер саҡ ҡыҙған тимерҙе ауыр балға менән туҡмауысы ағайға ҡарап тороусы егеттәр:

- Әхтәм абзый, тура һуҡмайһың бит, әллә күҙең күрмәй башлаған инде? - тип көләләр (Шуны ла әйтәйем, тимерлек ауылдың тау башында урынлашҡан, унан бөтә тирә-яҡтағы тауҙар күренеп тора).

- Йә, егеттәр, килегеҙ әле, - тип көлгән кешеләрҙе урамға саҡыра Әхтәм абзый. Өйөрөлөшөп торған егеттәргә алыҫта ятҡан тауға төртөп күрһәтә лә: - Ана, күрәһегеҙме Өтәгол (ул Үтәголдо шулай ти) тауының һул яҡ битендә ике ала ҡуян шаяра? Уларҙың ҡайһыһының күҙенә аҡ һалған? - ти.

Әммә егеттәр күҙҙәрен түгел, ҡуяндарҙың үҙҙәрен дә күрмәйҙәр.

- Их, егеттәр, егеттәр, йәп-йәш көйөнә шуны ла күрмәйһегеҙ! - тип аптырай Әхтәм абзый. - Ана, уң яҡта торған күрән ҡуяндың һул күҙенә аҡ һалған. Шуны ғына күрергә тейешһегеҙ бит инде!

Егеттәр бер һүҙ ҙә әйтә алмай, унның янынан юҡ булалар.

* * *

Таймаҫта бер нисә урында икмәк һатылыуға ҡарамаҫтан, Әхтәм абзый күрше Слановка ауылына икмәк алырға барған. Магазиндан сығыуына мотоциклы янында бер милиционер, килештереп, ҡулына ҡәләм, ҡағыҙ тотоп торған була, ти. Унның: - Где ваша каска?-тип һорауына, Әхтәм абзый аптырап тормай: - У вас надо спрашивать, куда дели мою каску? - ти. Тегенең күҙҙәре дүрт була. Ул бер ни әйтә алмай шулай тороп ҡала, ә Әхтәм абзый мотоциклына ултыра ла китеп тә бара. "Мин ғүмерҙә лә каска кейеп йөрөгәнем юҡ, бәләкәй сакта уҡ атайым "Башың нык булһын", тигәс, анау Ташлыйҙан, 76 метр бейеклектәге убанан баш менән төшөп нығыттым мин уны", тип өҫтәп ҡуйыр ине ошо ваҡиға тураһында һөйләгәндән һуң.

* * *

Әхтәм абзыйҙы идара хужаһы саҡыртып ала.

- Әхтәм, нишләп эшләмәйһең?

- Кем әйтә уны? Мин эшләйем!

- Ҡайҙа?

- ПМК-ла.

- Ундай ойошма юҡ бит ауылда.

- Бар ул!

- Ниндәй ойошма һуң ул?

-"Пока Миннури кормит".

*СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫНДА*

# "АҠ ПАРОХОД"...

## ни әйтергә теләне икән?

**Ошо көндәрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында Сыңғыҙ Айтматов повесы буйынса ҡуйылған "Аҡ пароход" спектакленең премьераһы булды. Донъя әҙәбиәте классигының билдәле әҫәренең сәхнә вариантын театрҙың художество етәксеһе Олег Ханов һәм Рәсәй һәм Европа тәнҡитселәре тарафынан "иң серле" тигән исем алған режиссер-ҡуйыусы Линас Зайкаускас яҙған. Журналистар менән осрашыуҙа улар спектакль өсөн төп ике тема: берҙән, Малай һәм өлкәндәр донъяһының үҙ-ара ҡаршылығы, икенсенән, ата-бабалар йолаһына тоғролоҡ, маңҡортлоҡ мәсьәләһе һайланды, тип белдергәйне. Премьера спектакле үҙ маҡсатына өлгәшә алдымы һуң? Ул башҡорт театры тамашасыһы күңелендә ниндәй тойғолар ҡалдырҙы? Бөгөн был һорауҙарға яуапты тамашасыларҙың үҙҙәре менән эҙләп ҡарайыҡ әле.**



**Әлфиә МӘҮЛИЙӘРОВА, педагогия фәндәре кандидаты:** Сыңғыҙ Айтматовтың "Аҡ пароход"ы һәммәбеҙ өсөн таныш әҫәр, уны беҙ мәктәп йәшендә үк уҡығанбыҙ. Әммә сәхнәлә ҡуйылған спектаклде күргәндән һуң, бөйөк яҙыусының ни өсөн үҙенең әҫәрҙәрен экранға сығарыуға ла, сәхнәләштереүгә лә ҡаршы булғанлығын, хатта быны "ҡайһылыр кимәлдә әҙәбиәтте талауға, уны тура мәғәнәләге аҡыл өйрәтеүгә, өгөт-нәсихәткә тиклем түбәнәйтеүгә" тиңләүен, һөҙөмтәлә, геройҙың һәм авторҙың ҡатмарлы күңел донъяһы юҡҡа сығыуы тураһындағы хәүефтәрен аңлайһың. Спектакль шул тиклем ауыр тойғолар ҡалдырҙы, уны Урал Иҙелбаевтың матур этник музыкаһы ла, ятраҡан актерҙарыбыҙҙың уйыны ла еңеләйтә алманы. Матур хыялдар менән йәшәгән, үҙе өсөн генә матур донъя уйлап сығарырға һәләтле баланың - Малайҙың ысынбарлыҡты шул тиклем ҡараңғы, һоро-көрән төҫтә генә күреүе лә ысынбарлыҡҡа тап килмәгән һымаҡ тойолдо.

Режиссер-ҡуйыусы был спектаклдә нимә күрһәтергә, нимә әйтергә теләне икән - ошо һорауҙы үҙемә ҡабат-ҡабат бирәм һәм уға яуап таба алмайым. Был драмала күҙәткән күренештәрҙе башҡорт театры сәхнәһе әле күргәне булмағандыр. Бына шуның өсөн дә Малай ролен башҡарыусы йәш актер ҙа уны тулыһынса асып бөтә алманы кеүек. Ҡурсаҡтар ҙа, режиссерҙың үҙенә генә хас булған ҡайһы бер алымдар ҙа сәхнәне йәнләндерә алманы, киреһенсә, улар артыҡ булды, ахырыһы. Беҙҙең халыҡ өсөн ят ул бындай спектаклдәр. Тамашасы театрға кәйефен күтәрергә, спектаклдә үҙен күрергә, ниндәйҙер һорауҙарына яуаптар эҙләп килә. Бәлки, әҫәрҙең тап ошолай ҡуйылышы кемгәлер оҡшар, мин үҙ фекеремде көсләп тағырға йыйынмайым. Тик "Аҡ пароход" драмаһы ла бер-ике тапҡыр ғына ҡуйылып, театр репертуарынан төшөп ҡала торған әҫәрҙәр рәтенән булып ҡуймағайы.

**Әлфиә САМАТОВА, хаҡлы ялда, Әбйәлил районы:** Беҙ китапты күпләп уҡыған, театр сәнғәтен ятраҡан быуын. Баш ҡала театрҙарындағы яңы спектаклдәрҙең һәр береһен ҡарай алмаһам да, форсат сыҡҡан һайын башҡорт театрына килергә тырышам. "Аҡ пароход" драмаһын күргәндән һуң, бер нәмә лә аңлашылманы, тип әйтеүселәр күп булды. Минең күңелемә лә ятып бөтмәне ул. Быныҥ ни өсөн шулай булғанлығын да белеп торам - режиссеры үҙебеҙҙеке түгел бит. 1964-1965 йылдар тирәһендә Сибай театры ошо уҡ спектаклде ҡуйғайны, уны бик ятратып ҡарағаным хәтерҙә ҡалған. Ул саҡта Олег Хановтың атаһы Закир Ханов әле Илфат Йомағолов башҡарған Ырыҫҡол ролен уйнағайны. Был спектаклде ҡарауы ҡыйын булды, етмәһә, эскелек мәжлесен оҙаҡ итеп, тәфсирләп күрһәттеләр. Элекке замандар, ура ҡысҡырып, халыҡтың эсеп йөрөгән ваҡыттары иҫкә төшөп китте. Әҫәрҙе тәрәнерәк асырға тырышыу булмағанға аптыраным, драматик эпизодтарҙы көлкөгә һабыштырып уйнау өҫтөнлөк алған, ҡайһы берҙә илай торған ваҡиғала халыҡ көлөп ебәрмәһен инде, тип йөрәкте тотоп ултырылды. Хәҙер әллә нишләп бөтөн пьесаларҙы комедияға әйләндереп күрһәтергә тырышалар. Спектаклдең аҙағы ла уйланып етмәгән кеүек. Малай бит Болан-әсәнең мөгөҙөнә элеп Ырыҫҡолға бишек алып килмәҫен дә, кешеләрҙең бәхетле булмаҫын да, үҙенең әкиәтенең тамамланғанын да аңлай. Һәр хәлдә, аңларға тейеш. Малай үҙенә ҡул һалмай, ул бит "балыҡҡа әйләнеү" һәм енәйәт ҡылыусыларҙан ҡасыу өсөн тау йылғаһына ташлана. Бында барыһы ла нисектер ябай ғына хәл ителде, шуға ла тамашасының күңеленә етә алманы, тип уйлайым, юғиһә, уларҙың бер өлөшө генә булһа ла күҙенә йәш алып сығыр ине спектаклдән.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Әлбиттә, бер-ике кешенең фекере менән генә яңы премьераның алдағы яҙмышын билдәләп, уға уңыш, йә уңышһыҙлыҡ юрап булмай. Әммә бында бер нәмәлә шик юҡ - ниндәй генә шәп булмаһын, ситтән саҡырылған режиссер милли театрҙың асылын билдәләгән, уға үҫеш килтерә торған спектаклдәр ҡуя алмай. Ошо уҡ театрҙа бындай тәжрибәләр - ситтән саҡырылған режиссер ҡуйған әҫәрҙәрҙе тамашасыларҙың ҡабул итмәүе һәм уның бер-ике тапҡырҙан уҡ репертуарҙан төшөп ҡалыу осраҡтары булды. Ләкин был тәжрибәнең һаман дауам ителеүе аптырата. Әгәр ҙә бөгөн Рәсәй театрҙарының 50 проценты режиссерһыҙ ултыра һәм бында үҙгәртеп ҡороуҙарҙан һуң ижади етәкселәр, режиссерҙар, дирижерҙар, балетмейстерҙар әҙерләү мәсьәләһенә иғтибар етмәү сәбәпсе булһа, беҙҙең республикала был йәһәттән проблемалар юҡ, тип иҫәпләрлек. Һәр хәлдә, үҙ көсө менән булһа ла уҡып ҡайтҡан һәләтле театр, кино режиссерҙары ла, балетмейстерҙар ҙа бар. Уларҙың үҙ тыуған республикаһында эшһеҙ һәм баһаһыҙ булыуы ғына ҡыҙғаныс.**

**"Аҡ пароход" премьераһы менән бер көндә үк тиерлек М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында болғар драматургы Станислав Стратиев әҫәре буйынса "Автобус" комедияһы ҡуйылды. Уны Ҡабарҙы-Балҡар республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Владимир Теуважуков сәхнәләштерҙе. Режиссерҙың үҙе әйтеүенсә, "Театр сәнғәте шуның менән бай - унда кешегә Кеше тураһында төрлө ысулдар менән һөйләп була". Тик был ысулдар шулай уҡ башҡорт тамашасыһына барып етә алырлыҡ булырға тейеш бит. Шуға өлгәшә алдымы икән Ҡабарҙы-Балҡар режиссеры? Бәлки, ошо хаҡта үҙ фекерен әйтеүселәр булыр?**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## Һибәт бабай мажаралары

Һибәт бабай ғүмере буйы тракторсы булып эшләне. Ул һәр ваҡыт тураһын, дөрөҫөн һөйләгән бер ҡатлы кеше була тоғайны. Бер ваҡыт был беларусын ҡыҙҙыра алмай икән. Күршелә йәшәгән механикты саҡыра ла: "Бына, Зәйнулла, трактор ҡыҙмай", - ти икән. Зәйнулла еҙнә тракторҙы ҡыҙҙырып ҡарай ҙа: "Бәй, Һибәт абзый, быныҥ искраһы бөткән бит", - ти. "Ярай, улай булғас, МТМ-ға барып, искра алып киләйем әле", - ти Һибәт бабай. "Бар, алып кил", - тип, Зәйнулла еҙнә мут ҡына йылмайып, күнәк тотторοп, Һибәт бабайҙы МТМ-ға ебәрә.

* * *

Бер ваҡыт Һибәт бабайға беларусы менән сөгөлдөр утарға ҡушҡандар. Агроном баҫыуға килеп, сөгөлдөр баҫыуын күрһәткән дә китеп барған. Быгаса трактор менән сөгөлдөр эшкәрткәне булмағас, Һибәт бабай сөгөлдөр рәттәрен тотош ҡырҡҡан да сыҡҡан. Ошо көндө совхозға районднан беренсе секретарь килә һәм уны шул баҫыуҙы күрһәтергә алып баралар. Был ваҡытҡа Һибәт бабай сөгөлдөрҙе "утап" бөтөп килгән була. Хужалар килгәнен күргәс, тракторын туҡтата ла улар янына килә. Совхоз директоры:

- Һибәт абзый, һин нәмә эшләйһең? Сөгөлдөрҙө ҡырып бөткәнһең бит, - тип ҡоторона.

Ә абзыйыбыҙ:

-Һи-и, бында юрунда, ана, баҫыуҙың эсенәрәк кереп ҡарағыҙ! - ти икән түшен киреберәк.

* * *

Шулай бер вакыт Һибәт бабай беларусы менән тауҙан төшөп килә, ә юлда 30-лап совхоз һарығы ята һәм ул, тракторын туҡтата алмай, ҡайһы берҙәренең өҫтөнән тапап үтеп китә. Совхоз директоры иртәгәһенә Һибәт бабайҙы идараға саҡыртып ала һәм:

- Һибәт абзый, ниңә һарыҡтарҙы тапаттың? - тип ҡысҡыра.

- Бәй, улар минең тормоз тотмағанды күреп яттылар бит, тороп китһендәр ине! - ти икән Һибәт бабай артыҡ иҫе китмәй генә.

**Әмир СОЛТАНГӘРӘЕВ.**
**Көйөргәҙе районы Таймаҫ ауылы.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАЙБЫҘ ҘА УЛ...

## рухи байлыҡ самалы

**Әхтәм АБУШАХМАНОВ, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостан Театр эшмәкәрҙәре союзы рәйесе:** Туҡһанынсы йылдар башында СССР тарҡалғас, беҙ бөтөнләй икенсе тормошҡа, йәғни барыһы ла аҡса менән үлсәнә торған дәүергә күстек. Ошоно беҙ әле һаман аңлап бөтә алмайбыҙ һәм шуға күрә лә беҙгә ауыр. Был ауырлыҡты еңергә өйрәнергә кәрәк ине халҡыбыҙға. Нисек итеп? Рәсәйҙе крәҫтиән иле тип атаған заманында Лев Толстой. Был Башҡортостанға ла ҡағыла. Әммә беҙҙең крәҫтиәндәргә ауырға тура килә бөгөн. Колхоз-совхоздар бөтөрөлөүе, эш булмауы арҡаһында ауыл халҡы ниндәйҙер күңел төшөнкөлөгөнә бирелде. Төшөнкө уйҙарға бирелмәй, үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алып, эске рухи донъяһын эшкә ҡушып, аяҡҡа баҫһын ине ауыл халҡы. Юғиһә, ауылдар бөтһә, киләсәктә ҡалаларыбыҙ ҙа ауыр хәлдә тороп ҡаласаҡ. Ни тиһәң дә, ҡаланы эшсе ҡулдар, ижади көстәр менән тап ауыл - әлеге лә баяғы крәҫтиән балалары тәьмин итә бит. Әйткәндәй, аҡса алда йөрөгән дәүерҙә арзан эшсе ҡулдар табыу маҡсаты илебеҙгә гастарбайтерҙарҙы күпләп йәлеп итте. Халҡыбыҙ күңел төшөнкөлөгөнән сыға алмай, ҡул ҡаушырып ултырһа, ситтән килеүселәрҙең беҙҙе баҫып алыу ҡурҡынысы ла бар. Был хәл шуныһы менән үтә хәүефле: килмешәктәр һәр саҡ иманһыҙ ҡылана. Улар беҙҙең рухи донъябыҙҙы, йәшәү рәүешебеҙҙе лә емереүе бар. Быға ҡаршы тора белергә кәрәк.

Тағы. Беҙ мәҙәниәт, сәнғәт тураһында күп һөйләйбеҙ ҙә ул, тик был өлкәләргә лә дәүләт тарафынан иғтибар аҙыраҡ тойола. Мәҫәлән, Октябрь революцияһынан һуң да тормош ауыр булған. Етемдәр, эшһеҙҙәр ул йылдарҙа ла аҙ булмаған, сәйәси һәм ижтимағи болғаныштар илдең бөтөнлөгөн аҙ ҡаҡшатмаған. Ләкин дәүләт барыбер иң тәүҙә халыҡтың мәҙәниәтен күтәрергә кәрәк, тигән маҡсатты алға һөргән бит. Күңел төшөнкөлөгөнән кем ҡотҡара ала? Әлбиттә, сәнғәт әһелдәре. Ил иҡтисады көрсөктә булһа ла, һәр ерҙә халыҡ театрҙары ойоштороғандар, филармониялар төҙөгәндәр. Бөгөн дә дәүләттең сәнғәт донъяһына иғтибарын үҫтерергә кәрәк. Мәҙәниәт - ул концерт, спектакль генә түгел, әлбиттә. Ул - күңел тыныслығы, бер-береңә булған мөнәсәбәттәр ихласлығы ла.

Матди ҡиммәттәр артҡан һайын, интеллектуаль хеҙмәттең баһаһы төшә. Был бик ҡыҙғаныс. Әйтәйек, бөгөн яҙыусыларҙың гонорар күләме, совет осоро менән сағыштырғанда, бик аҙ ғына. Совет осоронда, мәҫәлән, бер әҫәр өсөн драматургҡа өс мең һум түләнә ине. Бер мең ҡушып, был аҡсаға машина һатып алырға була ине. Бөгөн бер ҡуйылған пьесаһы өсөн драматургҡа 30 мең һум гонорар түләнә. 30 меңгә кем яҡшы пьеса яҙһын? Шуға милли драматургияны үҫтереү ҙә ҡыйын.

Бер яҡтан, иҡтисади йәһәттән бик насар йәшәмәйбеҙ ҙә кеүек. Һәр кемдә - машина. Матур кейенәбеҙ, тамағыбыҙ ҙа ас түгел. Ғөмүмән, матди яҡтан беҙ хәҙер байбыҙ. Дәүләт был тәңгәлдә ныҡ уйланғанға оҡшаған. Әммә халҡыбыҙҙың эске рухи донъяһы, уның күңел тыныслығы хаҡында баш ватырға кәрәк әле.

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

**Магазин кәштәләрендә ҡыҙҙырылған көнбағыштың ниндәйе генә юҡ хәҙер. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ошо ҡара емдәрҙе йыуып, хуш еҫле итеп ҡыҙҙырып һатҡан инәйҙәрҙе автобус туҡталышы, супермаркет, бәләкәй баҙар кеүек кеше күпләп йөрөгән урындарҙа йыш осратабыҙ.**

# КӨНБАҒЫШ ҺАТЫУСЫ ИНӘЙ

Улар, гәзәттә, рәткә теҙелеп, бер тирәләрәк ултыра, шуның менән һатып алыусыға тәмләп, һайлап алыу мөмкинлеге бирә. Айырым ултырғандар ҙа бар, улары, күрәһең, конкуренциянан ҡурҡып, ситтәрәк урынлашыуҙы хуп күрәләр. Көнбағыш һатыусыларҙың ҡайһы берҙәре иртән иртүк, икенселәре иһә, киреһенсә, кисен ҡараңғы төшкәс, үҙ яйы менән артыҡ ҡабаланмай ғына сығып ултыра. Сатлама һыуыҡ та, йәйге селлә лә ҡурҡытмай уларҙы. Нимә был ҡарауға күңелһеҙ һәм килемһеҙ тойолған кәсепте үҙ итә улар? Көнбағыш һатып байырға ынтылыуҙарымы? Ошо һорау менән халыҡ күпләп йөрөгән урындарҙың береһендә ултырған оло йәштәге апайға мөрәжәғәт иткәйнем. Һорауыма үҙенең тормош фәлсәфәһенән сығып яуап биреүе бик оҡшаны.

- Мохтажлыҡтан сыҡмайым мин бында, ҡыҙым, - тип һөйләп китте ул.- Ҡарт көнөмдә үҙемә кешеләр менән аралашыу, аҙ ғына булһа ла кемгәлер файҙалы булыу мөмкинлеген таптым, тип ҡыуанып ултырам. Заманында, әлбиттә, был кәсептән һиҙелерлек файҙа ла алдым. Ул сағында эшкә йөрөгән һымаҡ хис итә инем үҙемде. Алып сыҡҡанымды һатып бөтмәйенсә, өйгә ҡайтманым. Тап ошо шөғөлөм арҡаһында балаларҙы урынлаштырҙым, өй бөтәйттем, тиһәм, хата булмаҫ.

Хаҡлы ялға сыҡҡанда пенсиям бәләкәй ине, өҫтәүенә, укып йөрөгән ике ҡыҙым бар. Хәйер һорап хәйерселектән ҡотолоп булмай, осто оска ялғап, хур булып йәшәгәнсе тип, ояты биткә ҡапланым да, бөтә ҡыйыулығымды йыйып, тәүәккәлләнем. Минең менән бергә пенсияға киткәндәр кешегә ялланып баҙарға кейем-һалым йәки аҙыҡ-түлек һатырға сығып, бер ҙә мандымманы. Йә әйберен урлатты, йә, киреһенсә, эш биреүселәре төп башына ултыртты. Тәүҙә, әлбиттә, урамда ултырыуыма ныҡ ғәрләндем, шулай ҙа тора-бара өйрәндем. Бер аҙҙан үҙемде бай тип хис итә башланым. Юҡ, аҡсам күплектән, байып китеүҙән түгел, ә бурысым булмауҙан, юғиһә, пенсия аҡсаһы бит теге йәки был түләүҙәргә генә етә, йәшәргә иһә бурысҡа инергә тура килә ине. Бирәсегең булмаһа, үҙеңде баймын тип иҫәплә, тип ололар бер ҙә юҡҡа ғына әйтмәгән икән.

Аңламаған, үҙе эшләп ҡарамаған кеше көнбағыш һатыуҙы ваҡ эш тип тә ҡарай торғандыр. Ә минең өсөн бер ваҡытта ла эштең эреһе-ваҡы булманы, алдыма алғанымды еренә еткереп эшләнем. Бында ла эшемә намыҫ менән ҡараным. Көнбағышты үҙем белгән ышаныслы кешеләрҙән генә һатып алып, матур итеп йыуып киптереп, ҡыҙҙырып, таҙа һауытҡа ғына тултырып алып сыҡтым. Һатыу эшендә генә түгел, кеше менән эшләгәндә, аралашыуҙа иң мөһим шарт - бөхтәлек, таҙалыҡ һәм ихласлыҡ. Иң беренсе ошо хәҡиҡәтҡә таяндым. Кешенең бер тинен дә артыҡ алманым. Тиҙҙән даими клиенттарым барлыҡҡа килде.

Стаканлап көнбағыш һатмаһам, тамсылап йыйылғандың танһыҡ булыуын аңламаған булыр инем. Яңы шөғөлөмдән алған килемемде бик һаҡ тотондом. Тауыҡ өсөн алтын бөртөгөнә ҡарағанда тары бөртөгө ҡиммәтерәк булған кеүек, мин дә емдең дә, тиндең дә ҡәҙерен белергә өйрәндем.

Көнбағыш һатыусылар араһында бөгөн матди хәлен яҡшыртыуҙы уйлап ултырғандар бик һирәк. Улар, башлыса, минең һымаҡ үк, ваҡыт үткәреү, аралашыу, ҡала тормошон күҙәтеү өсөн сығалыр, тип уйлайым. Бынан ике тиҫтә йыл элекке кеүек, пенсия бик аҙ түгел хәҙер. Эшләгәне лә, эшләмәгәне лә бер кимәлдә ала. Был дәүләттең үҙ граждандарының бәхетле ҡартлығын хәстәрләргә тырышыуылыр инде. Аҙ булһа ла, пенсия йылына ике тапҡыр артып тора, мохтаждарға коммуналь хеҙмәткә түләүгә субсидия, ташлама бирелә. Бер һүҙ менән әйткәндә, оло йәштәгеләргә власть йөҙө менән боролдо. Һәр хәлдә, ололарҙан "икмәклек кенә аҡса бирегеҙ әле" тигәнде ишеткәнем юҡ хәҙер. Элегерәк иһә бындай күренешкә йыш осрала ине.

Ғөмүмән, тормош йылдан-йыл яҡшыра. Егерме йыл элек магазиндарҙа ла бер нәмә лә алып булмай ине. Хәҙер иһә аҙым һайын магазин, супермаркет, минимаркет. Тимәк, һорау бар. Был иһә халыҡтың яҡшы йәшәүенең туранантура күрһәткесе.

Өйҙәге ваҡ-төйәк эште әштер-өштөр итәм дә, өйрәнгән урыныма сығып ултырып, ҡала тормошон күҙәтәм. Яныма таныштар килә, бөтәнләй таныш булмағандар ҙа көнбағыш алғанда шатлыҡ-ҡыуаныстары менән уртаҡлашып китә. Ғаилә, эш тураһында башлаған һүҙҙән донъяуи мәсьәләләргә күсәбеҙ. Шуныһына иманым камил: халыҡ бөгөнгө тормоштан ҡәнәғәт.

Ә көнбағыш һатыусыларға йәлләп түгел, ә һоҡланып, хөрмәт менән ҡарарға кәңәш итер инем. Улар ҙа үҙҙәренә күрә ҡала урамының бер йәме, биҙәге булып ултыра, уның тормошонда ҡатнаша...

Шулай тип тамамланы һүҙен инәй һәм арыу ғына һабаҡ бирҙе. Ә беҙ көнбағыш һатыусы инәй-бабайҙарҙы йыш ҡына иғтибарға ла алмай үтеп китәбеҙ. Бәҡтиһәң, улар, ысынлап та, ҡаланың бер туҡтауһыҙ ҡайнап торған шау-шыулы тормошоноң айырылғыһыҙ бер өлөшө икән дә.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК КАРТЛАС

### Үлем донъяһына инеү

1995 йылда педагогика буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлағандан һуң, уйға ҡалдым: "Артабанғы тикшеренеү-эҙләнеүҙәремде ниндәй йүнәлештә алып барырға?" Һайланған юлым - педагогика буйынса артабан китергә теләһәм, тәжрибә майҙансығы булдырып, өҫ-дүрт йыл балаларҙы һәм уҡытыусыларҙы шөғөлләнып, һуңынан һандарҙы кәрәкле кимәлгә тап килтереп яҙып, ниндәйҙер "асыш" яһарға тура килер ине. Кандидатлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләгәндә мин үҙем өсөн шундай һығымта яһаным: педагогиканың методологик нигеҙҙәре бер ниндәй тәнҡитте лә күтәрә алмай. Кабинет ғалимдары уны шундай кимәлгә еткергән, тәрбиә тураһындағы фән көлкө генә тыуҙыра. Быға инаныу өсөн яҡланған диссертацияларҙың атамаларын ғына уҡып сығырға кәрәк - ябай хәҡиҡәттән тыш, уларҙа башҡа нәмә табыуы ҡыйын. Мин Рәсәйҙең Мәғариф министрлығына шундай тәҡдим индерер инем: мәктәпкәсә, дөйөм белем биреү һәм педагогиканың башҡа бүлектәре мәсьәләләрендә ғалим булырға теләүселәр өсөн кандидаттарға анығ учреждение шарттарында кәмендә - биш, доктор дәрәжәһен алырға дәғүә итеүселәргә һигеҙ йыл эшләү зарури. Мотлаҡ шуны ла билдәләргә кәрәк: тағы ҡайҙалыр икенсе урында эшләү ошо шарттарҙы боҙоу булып тора. Беҙҙең илебеҙ башҡаларҙан нимә менән айырыла? Беҙҙә теге йәки был эшкә тегеп ҡуйып була торған теләһә ниндәй ҡағыҙҙы эшләтеп алырға мөмкин.

Әммә теманан саҡ ҡына ситкә тайпылдым. Уҙған быуаттың 90-сы йылдары уртаһында минә үлемдең педагогик аспекттарына бәйле идея ялмап алды. Бер нисә педагогия докторына "Социаль-педагогик проблема булараҡ үлемдең феномены" тип аталасаҡ диссертациямдың ғилми консультанты булыуын һорап мөрәжәғәт иткәс, уларҙан хуплау тапманым. Коллегаларымдың береһе был мәсьәлә буйынса республикала билдәле философ Хазиев Валерий Семеновичҡа, Башҡорт дәүләт педагогия институтының философия кафедраһы мөдиренә мөрәжәғәт итергә тәҡдим итте. Ишек төбөнән үк боролоп сыҡмаҫ өсөн күҙалланған тема эргәһенә тағы бер нисәһен яҙҙым: "Башланғыс белем философияһы", "Башҡорт халҡының этнофилософияһына инеш" һ.б. Валерий Семенович исемлек буйлап бармағын яй ғына йөрөттө лә, темаларҙың береһенә туҡталды. Унда тап мин ни өсөн килгәнмен, шул теманың исеме тора ине. Ахырҙа, был тема "Кешенең үлеме: социаль-философик анализ" тип аталған социаль философия буйынса докторлыҡ диссертацияһы булып әүерелде. Теманың аҙаҡҡы атамаһы Башҡорт дәүләт университетының төп философы Баязит Сабирйән улы Ғәлимов тарафынан эшләнде һәм ул минә докторлыҡ диссертацияһын әҙерләүҙә һәм яҡлауҙа ҙур ярҙам күрһәтте.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Моғайын, гәзитебеҙҙе даими уҡып барған уҡыусыларҙа авторға һәм уның үҙ-үҙенде һауыҡтырыу, тукланыу ысулына, үҙенсәлегенә ҡарата төрлө һорауҙар тыуғандыр. Әгәр шулай икән, һорауҙарығыҙҙы беҙҙең адресҡа ебәрә йәки шылтыратып әйтә алаһығыҙ. Һорауҙар мотлаҡ авторға еткерелер һәм уларға яуаптар бирелер.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

97. Ҡиммәтле энергияғыҙ бер кемгә лә кәрәкмәгән эштәргә түгелгән кеүек, ул маҡсатһыҙ уйҙарға ла әрәм ителә. Аңығыҙҙы 1000 ваттлыҡ энергия сығанағы тип күҙ алдына килтерегеҙ. Уйҙарығыҙ төп проекттан ситкә китеп, буш борсолоуҙарға түгелә икән, 100 ватт юғалтаһығыҙ. Тиҙҙән барлыҡ энергия сығып бөтәсәк - аңдың тәбиғәте шундай. Әгәр тәртип юҡ икән, энергетик кимәл наҡысланасаҡ, ә ҡаҙаныштар минималь буласаҡ. Уйҙарығыҙҙы контролгә ҡуйығыҙ һәм тирә-яҡтың нисек үҙгәргәнен күрерһегеҙ. Энергия килеүен тойорһоғоҙ һәм ҙур проблемаларҙы еңел генә хәл итерһегеҙ. XIX быуат философы Анри Фредерик Амель был хаҡта шулай тигән: "Маҡсатлы хәрәкәт өсөн уйҙарҙы ихтыяр энергияһы менән бергә туплауҙан да файҙалы нәмә юҡ".

98. Һәр кешенең асылы булып уның характеры тора. Уны уникаль, таҙа һәм көслө итегеҙ. Нимәнелер эшләмәй тороп, мин шуны эшләйем, тип әйтмәгеҙ. Ауыҙығыҙҙы үлсәп асығыҙ, бары тик дөрөҫтө генә һөйләгеҙ. Ипле, маҡсатҡа ынтылышлы һәм изгелекле булығыҙ.

99. Тәбиғәттең бер ваҡытта ла үҙгәрмәгән ҡанунын онотмағыҙ: изгелек һәр саҡ яуызлыҡты еңә.

100. Тыныс аҡыл, аң - даими байрам. Ҡомһоҙлоҡ һәм матди байлыҡҡа ынтылыш бер ваҡытта ла һеҙҙе ташлап китмәҫ тыныслыҡ һәм бәхет хаҡына ауыҙлыҡланырға тейеш. Булғанына шөкөр итегеҙ һәм шуның менән бәхетле булығыҙ. Һеҙгә матди ҡиммәттәр ысынлап та кәрәкме? Тотанаҡлыҡ туҙемлелек, ҡыйыулыҡ, иғтибар туплау кеүек үк көндәлек практика һәм ысын күңелдән шуны теләү һөҙөмтәһендә үҫтерелергә мөмкин.

101. Һәр көн яңы кеше менән танышығыҙ. Барлыҡ дуҫтарығыҙҙың йәки таныштарығыҙҙың көн һайын тулыланып торған исемлеген ҡул аҫтында ғына тотоғоҙ. Тормоштарын башҡаларға яҡшы мөнәсәбәт менән тултырған кешеләр ысынлап та бай, лайыҡлы тормошта йәшәй.

102. Боронғо һинд мәҡәлен иҫегеҙҙән сығармағыҙ: "Аңығыҙҙы буйһондороп, тотош донъяны буйһондораһығыҙ".

103. Даими матди байлыҡ туплауығыҙға түгел, ә бәхетле булып ҡалыуығыҙға күберәк иғтибар бирегеҙ. Тормошҡа дөрт эҙләнеүҙәр һәм тәрән уйланыуҙар һөҙөмтәһендә үҫешә һәм тығыҙлана.

104. Һәр көн ҡыҫҡа ғына "фекер ялы" алырға ғәҙәтләнегеҙ. Иртән биш минутҡа Бермуд утрауына китегеҙ. Төшкө аштан һуң үҙегеҙҙе Урта диңгеҙҙә йөҙөп йөрөй тип күҙаллағыҙ. Ауыр эш көнөнән һуң Альп тауҙарында саңғы шыуығыҙ. Һуңынан инде өйгә ҡайтһағыҙ ҙа була. Бындай күнекмәне ике ай дауамында булһа ла эшләп ҡарағыҙ, һуңынан инде ошо бер нисә минутты башҡа эштәрегеҙҙе һәм мөһим осрашыуҙарығыҙҙы планлаштырған кеүек, эш графигына индерәсәкһегеҙ. Һөҙөмтә бик яҡшы буласаҡ.

**Робин ШАРМА.**



## 1 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Торговый центр". Сериал (16+)
16.15 "Пока еще не поздно" (16+)
17.00 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Условия контракта", 1-я и 2-я серии (16+)
23.25 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Так себе каникулы". Комедия (12+)
01.45, 03.05 "В тылу врага: Колумбия" (12+)
03.00 Новости
03.40 "Гримм" (16+)
04.30 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 " Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Чужие тайны. Времена года" (12+)
15.35 "Тайны института благородных девиц", 55-я серия. Сериал
16.35 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Остров ненужных людей". Сериал (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Склифосовский", 1-4-я серии (12+)
01.05 "Дежурный по стране"
02.00 "Большие танцы. Крупным планом"
02.15 "Вести+"
02.40 "Кровавые следы: убийство в семье". Сериал (16+)
04.35 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
